# Һәнәк

4

АПРЕЛЬ 2009




БЫЛ ҺАНДА:

**АПРЕЛЬ ЙЫЛМАЙЫУҘАРЫ**
2-3-сө битттәр

**МЫШЫ ИТЕ ТӘТЕМӘНЕ...**
10-се бит

# “Инде Мөхәмәтдин”



Мөхәмәтдин ағай һуғышта яңактан яраланып ҡайтҡан ине. Шуға ҡыйынлыҡ менән һаҡауыраҡ һөйләште. Бер саҡ быларға Байғаҙы ауылында йәшәгән ике ҡәйнеше килеп төшә.

– Мә, еҙнә, боҙ, – тип бер ярты һоналар Мөхәмәтдин ағайға.

Шешәне боҙоп, элекке ҡырлы стаканға ҡоя был.

– Ярай, ҡәйнестәр, үҙем боҙғас, үҙем эсәйем инде, – ти ҙә стакандағын бөтөргәнсә һуғып ҡуя еҙнә кеше һәм, икенсе тапҡыр тултыра стаканды. – Быныһы рәт аяғы, шулай булғас, ҡәйнестәр, үҙем эсәйем инде, – тип быныһын да эсеп ебәрә.

Өсөнсө тапҡыр ҡоя шешәләген бөтөргәнсе Мөхәмәтдин ағай.

– Ярай, ҡәйнестәр, төбөн һеҙгә биреп булмай бит инде, үҙем төплән ҡуяйым инде, – тип быныһын да төп күтәрә ебәрә еҙнәй кеше. Ҡәйнештәр һемәйеп ултырып ҡалалар.

Ошонан һуң ул “Инде Мөхәмәтдин” ағайға әүерелә.

# Мышы атыу

Был хәл һуғыштан бер нисә йыл алда булғандыр. Сәсән Сабирйән Мөхәмәтҡоловтың “Байғаҙының алты таҙы ауға сыҡҡан”, – тип башланған бәйете булған, тиҙәр. Үҙенең үткер теле арҡаһында репрессия ҡорбаны була ул сәсән.

Таҙ тигәндәй, ысынлап та Байғаҙы ауылында бер таҙ булған икән. Ниңәлер, Байғаҙы ауылы кешеләрен “таҙҙар” тип мәрәкәләйҙәр. Үсекмәйҙәр, өйрәнеп бөткәндәр.

Шулай, буранлы көндә бишалты кеше мышы атырға сыға. Аттарын туғарып, ағас араһына ышыҡҡа ҡуйып, мылтыҡтарын алып, болан эҙләп китә былар. Йөрөй-йөрөй бер саҡ икеһе лә бер мышы күрә. Береһе атырға әҙерләнә. Икенсеһе: “Ат!.. Атма!..” – тип ҡысҡыра. Шаулап торған буранда тегеһе “атма!” тигәнде ишетеп етмәгәндер инде, атып ебәрә.

Барып ҡараһалар, атыусының үҙенең аты ҡолап ята...

**Зәки СӨЛӘЙМӘНОВ.**
Бөрйән районы.




## Күрә алмау

**Дәрестә шаярып ултырған Данисты уҡытыусы:**

**– Атайыңды күрәйем әле мин һинең, – тип тыйып ҡуя.**

**– Атайым һеҙҙең үҙегеҙҙе беҙҙең сабынлыҡҡа инеп сапҡанығыҙ өсөн күрә алмай йөрөй әле, – ти эскерһеҙ бала.**



## Аптырағанһың икән...

**Сағыу таҫмалар, шарҙар менән матур итеп биҙәлгән машиналар никах теркәү йортона табан елдерә. Улар артынан “ашығыс ярҙам” машинаһы бара. Бындай күренеш Әминә әбейгә ҡыҙыҡ күренә, эргәһендә тороусы ҡатындан:**

**– Ә “ашығыс ярҙам” туйҙа эсеп иҫергәндәрҙе айныҡтырыу өсөн кәрәкме икән? – тип һорай.**

**– Юҡ шул, әбекәй, туй барышында килен кешенең тулғағы башланыуы мөмкин, замана туйҙары шулай үтеүсән хәҙер, – тип яуаплай таныш булмаған ҡатын.**

**Мөхтәр ҺӨЙӨШЕВ.**
Өфө районы.

*Хөрмәтле редакция! Беҙҙең Стәрлебаш районында Хужа Насретдинға окшаш кешеләр бик күп. Шуларҙың берәүһе, Калкаш ауылынан Батырша карт. Һеҙгә уның менән булған бер нисә мәҙәк тәкдим итәм.*

# Батырша мәҙәктәре



## Үҙем һүндерер инем

Батырша ҡарт янғын һүндереүсе булып эшләй. Бер көндө ул аттарға бесән сабырға тип киткәнендә, ауылда янғын сыға. Ауылдаштары елеп-сабып йөрөп ут менән көрәшкәндә, янғын насосы арбаһының тәгәрмәстәрен ватып килтереп ҡуйған булалар. Бабай, ҡайтҡас, бригадирҙы күрә лә:

– Мин бит һеҙҙең эшегеҙгә барып, бер ҙә ҡыҫылып йөрөмәйем, үлеп бараһығыҙмы ни, ҡайтҡас үҙем яйлап һүндерер инем әле янғынды! – тип пыр туҙына, ти.

## Йүнлерәк эш

Йәйге уттай эҫе көндә янғын һүндереүсе Батырша ҡарт эшкә сыҡмаған. Колхоз рәйесе, уның өйөнә барып:

– Бынау хәтле томра, хәүефле көндә һин нисек эшкә бармай ятаһың ул? – тип ҡәнәғәтһеҙләнеүен белдергән.

– Сыҡмаған янғынды, ҡасан сыға икән, тип көтөп ята алмайым инде, миңә йүнлерәк эш бирегеҙ, – ти икән Батырша ҡарт, иҫе лә китмәйенсә.

**Таһир КУСКИЛДИН.**

## ✦ Таяҡ мәрәкәләре

## Дауаханала

Терапевҡа сират ҙур. Кеме ултыра, кеме баҫып тора шунда. Бер мәл ҡара күҙлек кейгән ир ҡулындағы таяғын бер уңға, бер һулға һелтәй-һелтәй килде лә сиратһыҙ врачҡа инеп китте. Бер аҙҙан теге һуҡыр таяҡһыҙ ғына кире сыҡты. Уның артынан шәфҡәт туташы пәйҙә булды.

– Ағай, ағай, һеҙ бит таяғығыҙҙы онотҡанһығыҙ!

Сиратта тороусылар йылмайып ебәрҙе.

## Шәп табип

Был юлы бармағын бәйләгән берәү ике ҡултыҡ таяғына таянып, һикерәнләп килде. Бынығын да йәлләп, сиратһыҙ үткәрҙек. Йәнәһе, беҙҙең хәл әлегә түҙерлек, сауабы булыр. Бер ни ҡәҙәр ваҡыттан ул да таяҡтарын тотоп, һин дә мин килеп сыҡҡас, телһеҙ ҡалдыҡ. Беҙҙең шаҡ ҡатып үҙенә төбәлеүебеҙҙе күреп, ул:

– Бик шәп табип икән был, бер ҡарауҙан аяҡҡа баҫтырҙы, – тип һөйләнә-һөйләнә китеп барҙы.

**Әнүәр ТУҠТАМЫШЕВ.**

## Сәғәт йүнәтеүсе

Ну, оҙон сәслеләрҙе ярата ла инде был Зариф! Хур ҡыҙы кеүек ҡатыны булыуға ҡарамаҫтан, тегеһенә лә күҙ һала, быныһына ла матур һүҙен йәлләмәй. Шулай бер көндө, кискә табан, күршеләге тол Бибисараға килеп керә был. Әммә бер аҙҙан тәҙрә шаҡыған тауыш ишетелә. Бибисараның да, Зарифтың да йөрәге табанына төшә. Нимә эшләргә? Ишек асмай ҙа сара юҡ. Шул саҡ ирҙең күҙенә стеналағы сәғәт салына. Ул кәкүкле сәғәтте йолҡоп тигәндәй ала ла һүтә башлай. Тиҙҙән өйгә күрше ҡатыны килеп инә.

– Эй, эхирәткәйем, сәғәтем йөрөмәй, бына оҫта саҡырттым әле, – ти тол ҡатын.

**Вахит МОНАСИПОВ.**
Әстерхан өлкәһе.



А. ВЛАДИМИРОВ

# Эштәр көйлө, йөҙҙәр көләс, көлә-көлә “Һәнәк” килгәс

*Бында һытыҡ сырайлы кешене күрмәҫһең. Ихластар, ауыҙҙары колағына еткән. Бөтәһе лә ҡыуанып-көлөп кенә йөрөй. Хатта улар бербереһенә асыуланышҡанда ла йөҙҙәренән йылмайыу китмәй, тиҙәр. Шуға ла әбйәлилдәрҙең эштәре көйлө, тормоштары матур. Ауылдар төҙөк, юлдар көлөп ята. Кризис уларға нипочём.*

*Сере нимәлә тиһегеҙме? Бик ябай: әбйәлилдәр «Һәнәк» тип үлеп бара, йыл да яратҡан журналдарына күпләп яҙылалар, рәхәтләнеп уҡыйҙар, эстәрен тырнай-тырнай көләләр.*

*Яҡташтарын юмор менән дауалау өлкәһендә райондың почта элемтәләрен ойоштороу буйынса төркөм етәксеһе Айҙар Әҙғәмов, район хакимиәтенең мәғлүмәт бүлеге начальнигы Лениза Сәғәҙиева һәм башҡалар көсөн кыҙғанмай эшләй. Почтальондар тураһында әйтеп тораһы ла түгел. Юморотерапия бәйгеһендә Хәмит почта бүлексәһе – беренсе (начальнигы Зарифа Ғилминурова), Буранғол почта бүлексәһе (начальнигы Әлфиә Булатова) икенсе, Амангилде почта бүлексәһе (начальнигы Гөлйөҙөм Нуриәхмәтова) өсөнсө урынды яуланы. Улар “Һәнәк” журналының Почёт грамотаһы менән бүләкләнде.*







## Элеп алдым, һелкеп һалдым

### «Ҡыш бабай тиле түгел»

(12-се һан, 2008 йыл)

**Өфөнөң Совет районы биләмәләрендәге ташландыҡ хәлдәге йорт алдары, төҙөкһеҙ урамдар хаҡында фельетон журналыбыҙҙа донъя күргәйне.**

**«Революция урамының 129, 131-се йорттары алды 2009 йылдың төҙөкләндереү планына индерелде. Быға тиклем Кустар һәм Революция урамдарында асфальт һалыу, барлыҡҡа килгән соҡорҙарҙы ҡаплау һымаҡ эштәр башҡарылғайны. «Табиб» аптека пункты алды тротуарын ремонтлау ҙа үткәрелде», – тигән яуап алдыҡ Өфө ҡалаһы ҡала округының Совет районы хакимиәте башлығы урынбаҫары О. Кабанованан.**

### «Боҙ йомортҡа»

(1-се һан, 2009 йыл)

**Баш ҡалабыҙҙағы Степан Кувыкин урамының 29/1-се һанлы йортондағы «Йәрминкә» аҙыҡ-түлек магазинында тауыҡ эсенә боҙ һалып һатыла икән. Мәҡәлә ошо турала ине.**

**Өфө ҡалаһы ҡала округының халыҡты социаль яҡлау идаралығы начальнигы Д. Хәлилов беҙгә: «Етешһеҙлектәр тикшерелде һәм дөрөҫлөгө асыҡланды. Ревизия һөҙөмтәләре административ эш ҡуҙғатыу өсөн Киров районы прокуратураһына ебәреләсәк», – тип яуап бирҙе.**

Марат КӘРИМОВ

## Ул да көрәшсе

*Уның хакында һөйләйҙәр:*
*“Ялағай ҙа ялағай”.*
*Ялағайҙар табан ялай,*
*Ә ул табан яламай.*

*Бары тик шул: түрә менән*
*Кеселекле һөйләшә.*
*Хатта уның этенә лә*
*“Һеҙ” тип кенә өндәшә.*

*Эт һөймәгән бәндәләрҙе*
*Кинәнеп һүгеп ала,*
*Һырт йөндәрен*
*һыйпай-һыйпай*
*Моронон үбеп ала.*

*Түрә юкта ярһып-ярһып*
*Эттең эсенә тибә.*
*Етмәһә, үҙе һөйләнә:*
*“Вәт тебе!”лә” вәт тебе!”*

*Шулай үсен ала торғас,*
*Ҡалды-ҡуйҙы аяҡһыҙ.*
*Хәҙер инде бер кайҙа ла*
*Йөрөй алмай таяҡһыҙ.*

*– Ялағайҙарға каршы, – ти, –*
*Минең һәр бер аҙым, – ти. –*
*Шуның арҡаһында ғына*
*Инвалидлыҡ алдым, – ти.*



## Ял итергә вакыт

*– Эшкә барып кайтканыңды*
*Күрә инем көн дә, көн дә,*
*Һуңғы вакыт күренмәйһең...*
*– Яттым әле бюллетендә.*

*Хәйер кайҙа инде ятыу!*
*Йорт эшенән бушап кара.*
*Ҡатын-ҡыҙ бит өй эсендә*
*Әйләнсеккә окшап бара.*

*Бер эш эшләп бөтөрмәйһең,*
*Икенсеһе көтөп тора.*
*Етмәһә, шул ир тигәнем*
*Сәбәпһеҙгә өрөп тора.*

*Ярай хеҙмәт урынымдан:*
*– Бөткәнһеңдер ялкып, – тиҙәр. –*
*Етте һиңә өйҙә ятыу,*
*Ял итергә вакыт, – тиҙәр.*

*– Ҡара, ниндәй маладистар!*
*Путёвка ла юллағандар.*
*Һине кайһы ял йортона*
*Ебәрергә уйлағандар?*

*“Йоматау”мы, “Янғантау”мы,*
*“Танып” мәллә Аскындағы?*
*Хәйер, бөтәһе лә һәйбәт,*
*Бөтәһе лә якындағы.*

*– И, әхирәт, әллә инде*
*Һалышаһың белмәмешкә.*
*Беҙгә ниндәй санаторий?*
*Сакыралар кабат эшкә...*





М. ҒАФАРОВ

### Ишетмәһәң – ишет!

## Үрләү һәм тәгәрәү

– Ишеттеңме бер хәбәр?

– Юҡ әле.

– Ишетмәһәң – ишет: Мәсетле районында Ләмәҙтамаҡ тигән ауыл эсенән асфальт юл үтә.

– Әйттең хәбәр, төҙөк ауылдарҙың барыһынан да ундай юлдар үтә инде ул.

– Шулайын шулай. Әммә Ләмәҙтамаҡтағы юлдан автобустар йөрөмәй.

– Бәй, ауылға бөтөнләй автобустар йөрөмәйме ни?

– Ауылға йөрөүен йөрөй ҙә, тик ауыл эсендәге асфальт юлдан түгел, ә тау аша китә.

– Халыҡ Екатеринбургка, Өфөгә, йә тағы ҡайҙа булһа ла нисек бара һуң?

– Бөтә хикмәт тә шунда шул: ауыр-ауыр сумкаларын йөкмәп, автобус үткән тауға йәйәү үрләйҙәр. Ауылға ҡайтканда инде, кireһенсә, аҫка тәгәрәй ләмәҙтамаҡтар!

– Бәй, ауыл эсендәге асфальт юл нимәгә кәрәк һуң, былай булғас?! Бынағайыш, ишетмәһәң – ишет!

ИШБИКӘ менән ҠУШБИКӘ.

# «Һеҙҙә нисек? Беҙҙә шулай...»

## Тештәребеҙгә шөкөр

Һәнәк туған, именлек-һаулыҡтаһыңмы? Аяҡ-ҡулдарың, тешең һыҙламаймы? Теш тигәндәй, беҙҙең яҡ кешеләренең дә тештәре хәҙер һинеке кеүек үткер, иҫән-һау. Нисек тиһеңме? Бына тыңлап тор: беҙҙең Митрәй-Әйүп ауылында ике ҡатлы йорт бар. Унда һаҡлыҡ кассаһы, почта бүлексәһе, телефондан шылтыратыу бүлмәләре бар. Былarҙан тыш, бер нисә бүлмә буш торҙо. Торҙо тим, сөнки хәҙер унда, үҙебеҙсәләп әйткәндә, теш мастерскойы. Шәмбе һәм йәкшәмбе көндәрендә ҡаланан теш табиптары килеп, ауыл кешеләренең тештәрен дауалай. Ә бит шул теш күрһәтәм тип, беҙгә быға тиклем район үҙәгенә йөрөргә тура килә ине. Унда барып етер өсөн ауылдан автобус туҡталышына тиклем өс саҡрым йәйәү тәпәйләргә кәрәк. Был да бөтә кешенең хәленән килерлек түгел, араларында балалар, ҡултыҡ таяғына таянып йөрөүсе ҡарттар, сирлеләр ҙә бар. Шөкөр, бөгөнгә беҙҙең өсөн теш мәсьәләһе ябыҡ, рәхәтләнеп, һау тештәрҙе ыржайтып, «Һәнәк»те уҡып, хихылдап көлөүҙән арынмайбыҙ.

**Миҙхәт ЗАРИПОВ,**
һуғыш һәм хеҙмәт ветераны.
Саҡмағош районы.

## Буласак донъя тоткалары

***Баймак районының Иҫке Сибай ауылында йәшәүсе балалар үҫкәс кем булыуҙары хакында бәхәсләшә:***

*– Укытыусы, – ти, танауын мыш-мыш тартып, Гәли. – Атайым таҙа эш һайларға куша, атай ҙа, әсәй ҙә фермала эшләгәс, өйгә силус еҫе һеңгән...*

*– Һе, тапканһың һөнәр, шунан өйөңә балаларҙан артып калған кағыҙ, акбур, ташырһыңмы икән? Ә мин мотлак түрә генә буласакмын! – ти Азат, башын юғары күтәреп. – "Әнә, беҙгә килгән хужалар иң тәүҙә матур итеп өй һалып алалар, шунан ғына үҙ эштәренә тотоналар",– ти атайым.*

*– Ә-ә, улай булғас, мин дә түрә булам, – тип тиҙ генә фекерен үҙгәртә Гәли.*

*– Иң тәүҙә мин әйттем, ызначит, мин булам. Үҙемә өй һалып, байып алайым да, шунан һин минең урынға килерһең, – тип кырт киҫә Азат.*

*– Әһе, һинән һуң миңә нимә калыр тиһең, хитырый!*

*– Калыр, калмай ни! Ана бит, беҙҙә өс-дүрт йыл һайын хужалар алышынып, байып торалар, бер кемдең дә миңә калмаған, тип зарланғаны юк. Күрше Фәрит бабай әйтә бит, килеп-китеп торған түрәләр өсөн торлак фондын һакларға кәрәк ине, тип. Был, мин киткәс, һиңә яңынан йорт һалып торорға кәрәк булмай, минең урында йәшәйәсәкһең тигәнде аңлата.*

*– Юк инде, унда үҙең йәшә, нишләп мин һинең өйҙә йәшәргә тейеш? Түрә булғас, өп-өр яңыһын һалдырасакмын!..*

***Быларҙы күҙәтеп торған бер карт ауыр көрһөнөп куя ла:***

*– Үәт бит, замана балалары ниндәй өлгөләрҙә тәрбиәләнә... Сак-сак тын алып торған «Сибай» ауыл хужалығы кооперативы һеҙҙәй «киң күңелле» түрәләрҙән һуң бөлөп төшмәҫме икән? – тип, тағы бер аҙ тегеләргә карап тора ла, ары атлай.*

**Һөйләшеүҙе Х. ХӨСӘЙЕНОВ менән**
**Ф. ӘБҮБӘКЕРОВ ишетте.**

Ю. РӘФКӘТОВ




А. ӘНҮӘРОВ



**– Иртәнән бирле ултыраһың – ҡайҙа аҡсаң?**
– Сидишь с утра – где же деньги?

# Мәҙәниәт йортомо был?

Өфөлә хәҙер мәҙәниәт йорттары бик күп. Шуларҙың береһендә – "Юбилейный"ҙа һуңғы ваҡытта "Ҡазан һандуғастары"ның сығыштарын, исемләп әйткәндә, Салауат Фәтхетдинов етәкселегендәге концертты ҡарарға насип булды. Әммә һүҙем, артистар тураһында түгел, бына ошо мәҙәниәт йорто хаҡында булыр. Был йорттоң, тыш яҡтан уҡ ҡотһоҙ булыуын һәр кем күрәлер. Баҡтиһәң, эстә лә шул уҡ күренеш икән. Ә бит һуңғы осорҙа бындай мәҙәниәт йорттары һәр йәһәттән матур итеп йыһазландырылды. "Юбилейный"ҙың иһә, тышына ҡул һелтәп, эсенә барып инһәң, элекке ат һарайҙары иҫкә килеп төшә.

Күңел асырға, рәхәтләнеп ял итергә тип өмөтләнеп килгән халыҡ белмәй-абайламай сисенеп ташлай ҙа бер нисә минуттан гардеробҡа барып яңынан кейемен алырға, ошо килеш тамаша бөткәнсе ултырырға мәжбүр була. Сөнки ҡыштарын бында кейемһеҙ ултырыу мөмкин түгел. Мин дә шул "бәхет"кә тарыным. Ныҡ һалҡын залда тик кенә ултырып та булмай икән.

Бер саҡ башты тегеләй-былай борғолап, юғарыға ҡарай башлағайным, түшәмдә эленеп торған ярты метр самаһы оҙонлоғондағы бысраҡ үрмәксе ауын күреп, аптырап ҡалдым. Үҙ күҙҙәремә үҙем ышанмай ныҡлабыраҡ күҙ ташлаһам, ысынлап та бәүелеүенән, бына хәҙер өҫкә өҙөлөп төшөүенән ҡурҡып, сығып китергәме икән тип тә уйлана башланым да, башҡаларға ҡарап, туҡталып ҡалдым.



Бындағы бәҙрәф хаҡында һөйләүе лә уңайһыҙ. Ундағы тәртипһеҙлекте күреүҙән сәстәр үрә тора. Ҡорамалдары, бигерәк тә, унитаздары, хан заманынан ҡалғандыр, моғайын. Иҙәндәрендә сүп-сар, бысраҡ ҡағыҙҙар аяҡ баҫҡыһыҙ булып һибелгән. Бәҙрәф бүлмәләренең ишек келәләре эшләмәй, тотоп килгән сумканы элеп ҡуйырлыҡ сөй хаҡында, һыу тураһында һөйләп тораһы ла юҡ.

Мәҙәниәт йортонда төрлө алыпһатарҙар ултыра, кәсеп итә, моғайын, аренда өсөн улар аҡса түләйҙер бит. Шулай булһа, яуаплы кешеләр бөтә тәртипһеҙлекте аҡса юҡлыҡҡа ғына ауҙарып ултырмаймы икән? Күпләп халыҡ йөрөгән мәҙәниәт усағын тәртипкә килтерерлек мөмкинселек, сығым таба алырлыҡ хәлдә түгелме ни был йорттоң хужалары?

**Сәүиә СӘҒИТОВА.**




**– Ҡайышты ҡыҫыбыраҡ быуайыҡ...**
– Потуже затянем пояса...



**ҠАТНАШАЛАР:**
**Пенсионер ҡарт менән ҡарсыҡ**

Яҡты, йылы йортта береһе иҙән буйлап уйланып йөрөй, икенсеһе кроссворд сисеп ултыра.

**Ҡарсыҡ.** Әйт әле, ҡарт, популяр журналдың исемен. Уртаһында “н” хәрефе бар.

**Ҡарт.** Шуны ла белмәйһеңме? “Огонёк”!

**Ҡарсыҡ.** Биш кенә хәрефтән. Тә-әк, белдем, “Һәнәк”! Шуны ла белмәйһең, үҙең журналды минең ҡулдан тартып алып уҡыйһың.

**Ҡарт.** Миндә әле уның ҡайғыһы юҡ!

**Ҡарсыҡ.** Нимә ҡайғыһы һуң? Ике-өс көн инде, балтаһы һыуға төшкән кеше кеүек йөрөйһөң. Әллә берәй сибәргә ғашиҡ булдыңмы?

**Ҡарт** *(асыуланып)*. Булдым, атаң башына!.. Мин президент булырға теләйем.

**Ҡарсыҡ** *(аптырап)*. Нимә, әллә ҡолаҡтарым насар ишетә башланымы? Берәйһенә һөйләй күрмә, аҡылдан яҙған тиерҙәр. Ҡайҙан килеп инде был тиле уй башыңа?

**Ҡарт.** Ниңә ундай уй минең башҡа килмәҫкә тейеш әле! Бүтәндәрҙән ҡайһы ерем кәм? Ике юғары белемем бар, абруйлы булдым.

Рәсих ХАННАНОВ




**Скетч**

**Ҡарсыҡ** *(көлөп)*. Ә бөгөн һин пен-сио-нер! Тимәк, тишек биҙрә кеүек, бер кемгә лә кәрәгең юҡ. Үлеп китһәк, пенсия түләүҙән ҡотолдоҡ, тип шатланырҙар ине. Ана, булған льготаларҙы ла бөтөрҙөләр. Пре-зи-дент, имеш!

**Ҡарт.** Ғүмер буйы уҡытыусы булып эшләһәң дә, сәйәсәттә бер нәмә лә аңламайһың. Хәмәйҙең Хәмәйе, мин президент булырлыҡ кешемен, ти.

**Ҡарсыҡ.** Ул әйтер инде, заводта инженер ине, ҡыҫҡарттылар, үҙе йәш.

**Ҡарт.** Етәксе намыҫлы кеше булырға тейеш, аңланыңмы!

**Ҡарсыҡ.** Аңланым да ул. Намыҫлы етәкселәрҙе ҡайҙа күрҙең икән? Илде кемдәр көрсөккә






А. САЙРАНОВ, М. ЛАРИЧЕВ,
М. ХӨРМӘТОВ һүрәттәре.





килтереп еткерҙе? Шулар! Ельцин бына тигән илдең башына етте. Горбачёвҡа АҠШ-та алтындан һәйкәл ҡуясаҡтар икән. Был етәкселәр илде ҡайҙа алып баралыр, әле асыҡ ҡына белгән юҡ.

**Ҡарт.** Бер нәмә лә алтын балыҡ әмере менән эшләнмәй. Булыр, эшләрҙәр әле.

**Ҡарсыҡ.** Ҡасан, ҡыҙыл ҡар яуғасмы?! Буш тигәндәре ярты донъяны ҡанға батырҙы. Ә Америка ниндәй хәлгә ҡалды, эшһеҙҙәр һаны буйынса рекорд ҡуйҙы.

**Ҡарт.** Һин әллә ҡайҙарға кереп киттең. Беҙҙең республикабыҙҙа үҙ тормошобоҙ. Етәкселәребеҙ бына тигән. Күршеләребеҙҙә лә шулай. Рәхимов менән Шәймиев йөҙ йылға бер килә торған шәхестәр. Халыҡ өсөн бөтәһен дә эшләйҙәр.

**Ҡарсыҡ.** Һин һуң ҡайҙа президент булырға теләйһең? Рәсәйҙәме, әллә Башҡортостандамы?

**Ҡарт.** Ул хаҡта уйлағаным юҡ әлегә.

**Ҡарсыҡ.** Үҙебеҙҙә тиһәң, һуңға ҡалдың: беҙҙә бүтәнсә президентты һайламайҙар, Мәскәү тәғәйенләй. Хәҙер өсөнсө йылға китте, ә һин... шул бөтөрөлгән тәртипте лә белмәйһең! Ярай ҙа инде дүрт мең һум пенсияңды ҡыҫҡартмаһалар...

**Ҡарт.** Мин үҙем ҡыҫҡартасаҡмын.

**Ҡарсыҡ** *(көлә)*. Нәмәңде ҡыҫҡартаһың, былай ҙа бит...

**Ҡарт.** Һин насарға борма. Мин дәүләт аппараттарын ҡыҫҡартасаҡмын. Бик ныҡ ишәйҙеләр. Элек бөтә партия, совет етәкселеге бер Кремлгә һыя ине, хәҙер һәр министрлыҡ батша һарайынан да ҙурыраҡ, зиннәтлерәк бинала йәшәй. Ябай ойошмалар уларҙан да уҙҙыра. Ә етәкселәре?! Үҙҙәрен президент тип атай башланылар. Президент илдә берәү булған кеүек, республикала ла берәү булырға тейеш.

**Ҡарт.** Килешәм. Шул уҡ ваҡытта уны халыҡ һайлап ҡуйһын. Сөнки ул үҙ кешеләренең нимәгә һәләтле икәнен яҡшы белә. Президент минең кеүек тәжрибәле, белемле һәм эсмәгән-тартмаған кеше булһын.

**Ҡарсыҡ.** Ундай әҙәм бөгөн кемгә кәрәк? Үлтереп ташларҙар үҙеңде, шул булыр. Ә мин нимә эшләрмен? *(Күҙ йәшен һөртөп, илағандай ҡылана).*

**Ҡарт.** Ҡуй, күҙ йәше генә етмәгән...

**Ҡарсыҡ** *(көлөп ебәрә).* Ә-ә, ҡотоң ботоңа төштөмө? Мин һинең менән ҡартлас, шаярып һөйләштем.

**Ҡарт.** Тиле!

**Ҡарсыҡ.** Тиленән ишетәм! *(һөт бидоны алып картына һуҙа).* Бар, тиҙ генә “Пятерка”ға барып, һөт алып ҡайт. Юғиһә, үҙеңә һоло бутҡаһы бешерергә һөт бөткән. Тик ҡара уны, иплән йөрө, машина аҫтына барып кермә.

**Ҡарт.** Ярай, ярай... *(Бидонды алып, сыға.)*

**Ҡарсыҡ.** Ул президент булһа, мин кем булам һуң? *(Бармағы менән сикәһенә ҡағылып, бер тегеләй, бер былай борғолай.)* Хи-хи-хи!.. *(Ҡысҡырып көлә-көлә сығып китә.)*

# Һәнәктә һәләт һынау

## Күперекле һайыҫҡан

Бер мәл әсәйем ике туған ҡустыһына:

– Тышта ҡулйыуғыс эргәһендә асыҡ килеш һабын ҡалдырып булмай. Йә ҡарға, йә һайыҫҡан ала ла китә, – тип зарлана.

– Әйтәм, баянан бирле беҙҙең яҡта бер һайыҫҡан ауыҙы күпереп улай-былай осҡолай, һеҙҙән ҡасҡан ҡоштор әле, – ти ҡустыһы, ауыҙын йырып.

## Алданыу

Ауылға ҡунаҡҡа килгән әхирәте тауыҡтарының йомортҡа һалмауҙарына борсола:

– Оялары ла йылы, ашау-эсеүҙәре лә яҡшы, әллә нәмә етмәй уларға...

– Ә беҙҙең тауыҡтар көнөнә өс-дүрт йомортҡа һала. Ояларына электр энергияһы үткәреп, лампочка ҡуйҙыҡ. Иртә менән тауыҡтарҙы ояларынан сығарып, бер аҙ йөрөткәс, кире бикләйбеҙ. Һыу ултыртып, ем ашатҡас, ике-өс сәғәткә утты һүндереп ҡуябыҙ. Тауыҡтар төн еткән икән, тип төнәйҙәр. Шунан утты ҡабыҙам. Тегеләр берәм-берәм йомортҡа һалалар, килемде йыйып алам да, тағы утты һүндерәм. Көн буйы шулай яндырып-һүндереп, тауыҡтарҙы алдаштырып, әллә күпме йомортҡа йыйып алам. Һин дә шулай эшләп ҡара, – ти.

Тәүҙә ышанмайыраҡ торған әхирәте, ҡайтҡас, был тәжрибәне үҙ тауыҡтары менән үткәрә. Шул ваҡытта ғына ул төп башына ултырғанын аңлай... Бушҡа ғына ҡатын-ҡыҙҙар үҙ-ара: «Әхирәтеңдә тыңла ла үҙеңсә эшлә», – тип әйтмәй икән шул.

**Радик ШӘРӘФЕТДИНОВ.**
Баймаҡ районы.



# Һөйләй алмай



Һәр ауылдың үҙенә генә хас гөрөф-ғәҙәттәре, йолалары була. Стәрлетамаҡ районының Боголюбовка ауылы ир-аттарының йәнен фиҙа ҡылырҙай шөғөлдәре һанап бөтмәле түгел, тиҙәр. Имеш, уларға бергә йыйылыу ғына кәс, тотоналар кемуҙарҙан шәплектәре тураһында фәстерергә.

– Мин кисә вәт шәп ҡыҙ менән таныштым әле, прямо бына ҡалаҡҡа һалып йоторлоҡ. Бөгөн үҙенә ҡунаҡҡа саҡырҙы әле.

– Уй, кисә беҙ елле ҡунаҡ булдыҡ, нисек өйгә ҡайтып йығылғанды, биллаһи, хәтерләмәйем.

Егеттәр сурыта ғына. Имеш, улар береһенән-береһе зый кешеләр, һанаулы ғына ғүмерҙең һәр минутын ләззәтле итеп үткәрергә тырыша.

Тик бына сират Михаил Богдан тигән уҙаманға етеп, уның ауыҙына һыу уртлағандай ләм-мим тороуы уларҙың зитына тейә.

– Һөйлә инде берәй ҡыҙыҡ нәмә, – тип ялбара егеттәр.

Михаил эсенән: “Эх, минең кәсеп һеҙҙең шайы ғынамы ни?”– тип уйлап ҡуя ла ҡуйыуын, әммә теле әйләнмәй. Хәйер, ул турала бер ҡасан бер кемгә лә күкрәп һуғып һөйләй алмаҫ инде...

Һунар тиһәң, үлә инде Михаил. Бер көндө уның мышы ите менән һыйланаһы килеп китте лә мылтығын яурынына һалып, урманға ҡарай юлланды. Кемдер:

– Эй, дуҫ, юҡ менән булаһаһың түгелме икән,– тигәйне лә Михаил уның иҫкәртеүен ҡолағына ла элмәне.

– Кит әле, юҡ-барға шөбһәләнергә тиһәң, һине ҡуш инде. Законный мылтығым бар.

– Ә билетың?

– Уныһы ла бар. – Михаил кеҫәһенән таныгмаһын алып күккә сөйҙө. – Бына, күрәһеңме?

– Белгең килһә, республикабыҙҙа мышы атыу тыйыла.

– Кит әле, юҡты һөйләмә!

Бирәһе торған ҡолона – сығарып ҡуйған юлына, ти. Михаил Әлшәй районының Игенсе ауылынан арыраҡ китеп барғанда оло ҡара мышы күҙенә салынмаһынмы! Мәргән аусы бисараны шарт атып та ебәрҙе, уныһы тәкмәс атып барып та төштө. Хәҙер көн дә ҡаҙан тултырып, аш бешерәһе генә ҡалды. Кәтлит-мәтлит тураһында әйтеп тораһы ла түгел. Мышы ите бик файҙалы, тиҙәр. Тиреһен дә әрәм итмәҫ. Наполеон Бонапарт кеүек үк затлы мундир тектереп кеймәһә лә, берәй йүне сығыр әле. Әммә Михаилға мышы ите менән һыйланырға насип булманы шул. Мылтыҡ тауышы шаңдауы йыраҡҡа ишетелде. Баҡһаң, урманда аусыларҙың үҙҙәрен дә сәпкә алырға теләүселәр етерлек икән.

– Әйҙә, берәй ҡыҙыҡ нәмә һөйлә инде.

Боголюбовка ауылы ир-аттары ялбарыпмы-ялбара. Әммә Михаил ләм-мим. Мышы ите ашайым, тип үҙенең тоҙаҡҡа ҡабыуы, әҙәм мәсхәрәһенә ҡалыуы тураһында һөйләй алмай ҙа инде.

**И. ХАҠОВ.**




**– Ғәфү итегеҙ, минең аҡсам бөттө инде...**
– Извините, но деньги у меня закончились...

# Кәрим БУЛАТҡа – 60 йәш

*Шағир Кәрим Булатты 60 йәше тулыу уңайы менән “Һәнәк” ихлас күңелдән ҡотлай, сәләмәтлек, уңыштар, һүҙҙәренең үткер, кәләменең һәр саҡ осло булыуын теләй.*



## Коммерсанттар

Тормош ҡушты беҙгә үҙгәрергә,
Һаҡалары төштө һүҙҙәрҙең,
Байрамдар һәм ялдар күбәйҙеләр,
Матур яҡҡа донъя үҙгәрҙе.

Коммерсантбыҙ хәҙер һәммәбеҙ ҙә,
Ниндәй генә тауар тапмайбыҙ,
Илдәребеҙ баҙар булып киткәс,
Ҡайҙа, нимә тотоп һатмайбыҙ.

Кәнфит алып һата Асма апай,
Туңдырманы – Ғата-бухгалтер,
Презерватив һата Сәрби әбей,
Әлтәф ағай – уҡлау, бюстгальтер.

Мин дә һатам сит ил сигаретын,
“Алығыҙ – тип, – бына һәйбәтен:
Тартығыҙсы, улар фильтр менән,
Тыңламағыҙ дошман ғәйбәтен.”

Иртә таңдан шулай эшкә барып,
Ең һыҙғанып һатыу итәбеҙ.
Ҡарағыҙсы, донъя ниндәй ҡыҙыҡ:
Коммерсанттар булып бөткәнбеҙ!

## Заман киноһы

– Был ғәләмәт – тиле визыр
Нимә генә күрһәтмәй.
Егете лә, ҡыҙҙары ла –
Яланғастар, үлеттәй.

– Яңы заман киноһы, – тип
Улы ҡарай аҡланып.
– Ахырзаман еткерәләр
Ҡыҙҙар иргә атланып!

– Вәт, ер биттәр, оятһыҙҙар,
Аҙҙыралар әҙәмде,



Йүнһеҙ, һин дә ҡарайһың, – тип
Ҡарсыҡ бешә Әҙһәмде.

Кеше ҡарай, нимә ҡылһын,
Ял да кәрәк бит инде.
– Алла һуғыр күҙҙәреңде,
Ҡара итер битеңде!..

Сара ҡарсыҡ шулай ҡыҙып,
Тел тейҙерә улына;
– Бөтәгеҙҙе ҡыйратам! – тип
Уҡлау ала ҡулына...

Шул ваҡытта кадр бөтә,
Әбей, ҡыҙып, ташлана:
– Ух, был ер бит, иҫән ҡалды,
Тағы ла бит башлана!..

Бына шулай Сара ҡарсыҡ
Бик йыш әрләй “тиле”не.
Тел сайрамаҫ ине, бәлки –
Булған мулла килене.

## Эшһеҙ монологы

Бер таяныс тапмай кешеләрҙән,
Бер йондоҙһоҙ күңел күгендә,
Әлһерәгән эттәй тағы ҡайттым,
Эш урыны тапмай бөгөн дә.

Вагон тейәп алған мең һум аҡсам
Нисә көнгә етер, белгеһеҙ!
Их, түрәләр, шундай түбәнлеккә
Төшөрҙөгөҙ ниңә мине һеҙ?





А. ВЛАДИМИРОВ



Р. ЮНЫСОВ

# КЛАСТАШ

– Фатирың ошо буламы ни, класташ? Да-а, хан һарайы түгел шул, хан һарайы түгел. – Рәсим ишектән кергәс тә Шәүкәткә йәлләп ҡарап ҡуйҙы ла түшәмгә ымланы: – Ниңә тауыҡ кетәгендәй тәпәш итәләрҙер, ынтылһаң, ҡулды тейгеҙеп була.

– Ике метр ярым инде, стандарт, – тип ҡаршы төштө Шәүкәт, был әрһеҙ ҡунаҡҡа асыуы килеп. – Хәҙер бөтәһенең дә түшәме шул бейеклектә.

– Бөтә йорттар ҙа былай тәпәш түгел, әнә, министрлыҡта эшләгән өс туған ағай элитный йортта тора, уның түшәме күк көмбәҙеләй бейек, фатиры урап сыҡҡыһыҙ. Һинең өс бүлмәле фатирың уның бер бүлмәһе һымаҡ. Да-а, ремонт яһарға ла ҡулың теймәй икән, аҡса етмәйҙер.

Шәүкәт ғәрлегенән бер һүҙ ҙә әйтә алмай торҙо. Һай, әттәгенәһе, терелдәй һуйҙы, йә инде, ун йыл күрешмәгәйнеләр, әллә ҡайҙан килеп тапты был Рәсим, йәнә егерме йыл күрмәһә лә түҙер ине әле. Ишектә күренгәс тә, берәй “ярты” ултыртырға кәрәк, тип уйлай тағы, был тупһыҙға һаҫыҡ самогон да йәл.

– Ремонтты яңы бөтөрөп торабыҙ, – тип аҡлана башланы Шәүкәт. – Обойҙарҙы, ишектәрҙе алыштырҙыҡ, мебелде яңырттыҡ, иҙәнгә линолеум йәйҙек.

– Бара инде, бара, – тип тынысландырҙы уны Рәсим, класташының йөрәген тотҡолауын шәйләп. – Фатирың тарыраҡ та, былай ярарлыҡ инде, кем әйтмешләй, теште ҡыҫһаң, түҙерлек. Ә машинаң ниндәй, “Тойота”-фәләндә елдерәһеңдер инде?

– “Жигули”, – тип мығырланы Шәүкәт, оялышынан ҡыҙарынып.

– Ә эш урының ҡайҙа, һаман институтта уҡытҡан булаһыңмы, беҙҙән бер класҡа түбән уҡыған Хәлимде былтыр уҡ профессор иткәндәр икән. Мәктәптә маңҡаһы ағып йөрөй торғайны.

– Яңыраҡ фән кандидаты булдым, – тип бышылданы Шәүкәт, ғүмеренең заяға үтеүен төшөнөп, тамағына төйөр килеп тығылды.

– Ә ял итергә ҡайҙа йөрөйһөң? – тип һораусары менән язалауын дауам итте Рәсим. – Халыҡ Төркиә менән Египеттан ялҡып, Ҡытайға оса бит хәҙер.

– Отпускыла ҡәйнәмдең алты сутый баҡсаһында ҡаҙынабыҙ, – тине класташы, үкһеп ебәреүҙән көскә тыйылып. Тынысланыр өсөн бер ике төймә валидол йоторға тура килде. Байтаҡ ултырғас ҡына уға һөйләшеү һәләте кире ҡайтты.

– Ҡарале, Рәсим, үҙең ни хәлдә һуң, эшең, ғаиләң хаҡында бер һүҙ ҙә әйтмәнең бит әле.

– Нимәһен һөйләйһең уның, – Рәсим ҡул ғына һелтәне. –Ҡатын менән айырылыштыҡ, кризис тип эштән ҡыҫҡарттылар, ҡайһы саҡта икмәк алырлыҡ та аҡса булмай. Инде ятаҡтан да ҡыуһалар, нисек йәшәргә, ҡайҙа барып йығылырға?

Быларҙы ишеткәс, ағарынған, бер туҡтауһыҙ йөрәк тирәһен ыуғылаған Шәүкәттең битенә алһыулыҡ йүгерҙе, сикһеҙ һағышҡа батҡан ҡараштары осҡонланды, турһайған ирендәре яҙылып, йырылған ауыҙы тора-бара ҡолағына етте.

Ул йәһәт кенә һыуытҡыстан ҡәҙерле ҡунаҡ көтөп инде өс-дүрт йыл моңайып ултырған затлы коньякты сығарып, өҫтәлгә шапылдатып ҡуйҙы ла Рәсимде ҡосаҡлап алды. Унан да ҡәҙерлерәк ҡунаҡтың булыуы мөмкин түгел. Класташ бит ул!

**Марат ӘМИНЕВ.**




**– Эшем бик тығыҙ, һуңыраҡ шылтыратырһың.**
– Я очень занят, перезвони чуть позже.

## *Тәртипһеҙлекте тетеп*

# Кәҙерһеҙ КУНАК

1 Май исемендәге ауыл хужалығы предприятиеһы етәкселәре, белгестәре уны мәктәп йылдарынан уҡ белде. “Ярҙамсыл, файҙаһы ҙур”,– тип һөйләй ине уҡытыусылары. Юғары уҡыу йортонда ғилем һемергәндә лә ғалимдар уның әһәмиәте хаҡында мең ҡат туҡығандыр.

Бер көндө уны йәнә иҫенә төшөрҙөләр ҙә, кәңәш-төңәш итешеп, үҙен ҡунаҡҡа саҡырмаҡсы булдылар.

– Шәп идея!

– Ҡороҡҡостарҙы махом ҡырып һаласаҡ та ҡуясаҡ.

– Кәрәкмәгән ҡый үләндәренә көн бөтәсәк.

– Ашлыҡ ҡотороп уңасаҡ.

– Шулай шул, йыйып алғыһыҙ буласаҡ.

Араларынан берәүһе, моғайын, иң башлыһы булғандыр, йөҙөнә етди ҡиәфәт сығарып, былай тип ҡысҡырҙы:

– Беләһегеҙме, бөйөк аҡыл эйәһе Максим Горький уның турала нимә тигән? Юҡ, юҡ, үлһәгеҙ ҙә белмәйәсәкһегеҙ. Лутсы үҙем әйтәм дә ҡуям. Ул уны мөғжизәләр тыуҙырыусы нәмә, унда ауыл хужалығының бөйөк ҡаҙаныштары йәшеренгән, тигән, вәт!

Эште мыштырлап, оҙон-оҙаҡҡа һуҙманылар. Машиналарына ултырҙылар ҙа киттеләр алып ҡайтырға. Кеҫәләренә ҡыштырҙаҡтар һалырға ла онотманылар. Сөнки бик ябай ҡунаҡ түгел ул. Үҙенең мәртәбәһен яҡшы белә. «Һине ала килдек, әйҙә, рәхим ит»,– тип йылмайғанға ғына машинаға сығып ултыраһы юҡ.

Ҡунаҡты алып ҡайтыуын ҡайттылар ҙа, әллә берәйһе араларын бутаны, әллә хәтерҙәре насар булды, уны ни маҡсаттан килтергәндәрен дә онотто абзыйҙар. Тейешенсә ҡәҙер-хөрмәт күрһәтеү кәрәклеге ике ятып бер төштәренә лә инмәне. Хатта үҙенә йүнле генә бина ла таба алманылар. Һарай һымаҡ нәмәгә килтереп ырғыттылар ҙа – бөтә хәстәрлек шунының менән вәссәләм. Уныһының да иҙәне юҡ, тәҙрә-ишектәре ҡырылып бөткән, ҡайһы бер өлөшөндә стеналары, ҡыйығы ишелеп төшкән.

Әлбиттә, ҡунаҡ бындай ҙа насар ҡарашты көтмәгәйне. Ул теләһә ҡайҙа ҡәҙерһеҙ ятыуға ғәҙәтләнмәгән.

– Мине ошолай рәнйетеп ятҡырыр өсөн алып килдегеҙме ни? Баҫыуға илтегеҙ, минең урыным шунда.

– Башты ҡатырма әле. Һинең ҡайғың юҡ.

– Ҡара, нисек һөйләшәләр.

– Өйрәтмә!

– Былай оҙаҡ ятһам, зыяным тейеүе ихтимал. Тирә-яҡ мөхиткә ағыуым таралыуы бар.

– Өнөң сыҡмаһын! Шул ғына етмәгәйне. Алып ҡайт, алып кит. Әҙ аҡса кәрәк тиһеңме әллә!

Ҡойма ямғырҙар, ел-дауылдар ҡунаҡты йәлләмәне.

Бындай тупаҫлыҡты ауыл халҡы ла күрмәй ҡалманы, ҡунаҡтың ҡәҙерһеҙ ятыуын күреп, шаулашырға тотондолар.

– Был ниткән эш? Ҡунаҡты алып ҡайт та, әллә ҡайҙа ятҡыр, имеш.

– Исмаһам, үҙенә берәй йүнлерәк мөйөш тә табып бирмәнеләр.

– Былай ятһа, үҙен генә түгел, беҙҙе лә харап итә бит.

– Асыуланһа, асыуы бик зәһәр икән. Малдарҙы ҡыра башлауы ла бар.

– Кире илтеп ҡуйырға кәрәк.

Әммә ҡунаҡтың да, халыҡтың да ялбарыуын ишетергә теләүсе табылманы.

Бына шулай Туймазы районының 1 Май исемендәге ауыл хужалығы предприятиеһы етәкселәре алып ҡайтҡан ашламалар ҡапылғара ҡәҙерһеҙ ҡунаҡҡа әүерелде лә ҡуйҙы – ярым емерек һарайҙа теләһә нисек туҙышып ята, тирә-яҡ мөхит, халыҡ һаулығы өсөн ҙур хәүеф тыуҙыра. Ул ҡасанға тиклем шулай кешеләрҙе өркөтөп, ҡәҙерһеҙ булып ятыр икән?

**В. ҒАФУРОВ.**



# ШИФАХАНА өйҙә икән!

– Барам тигәс, барам! Егерме йыл буйы ал-ял белмәй эшләп, саҡ ҡына тын алырға хоҡуғым юҡмы ни?

Йәнекәйемдең сығырынан сығып барғанын күреп, тиҙерәк һалпы яғына һалам ҡыҫтырырға ашыҡтым:

– Һи, алтынҡайым! Кем-кем, һин күптән быға лайыҡ. Һинең аҡылың, тырышлығың өсөн, түрәң урынында мин булһам, әллә ҡасан ебәрер инем. Шундай ҙа эшселәргә ҡәҙер-хөрмәт күрһәтә белмәүҙәренә аптырайым. Һинһеҙ өс көн дә тора алмайҙар бит. Шулай булғас, үҙеңде ҡалайтып бер айға әллә ҡайҙа ялға ебәрһендәр инде! Ана, минең әллә ни кәрәгем булмағас, бушлай путёвка бирҙеләр. – Нисек итһәм иттем, үҙемдең ял йортона китергә йыйыныуымды ярып һалдым иремә. Тик бындай боролош уға бик оҡшап етмәне, былай ҙа сиртһәң ҡаны сәсрәргә торған йөҙө тағы ла баҙрап китте.

– Мин барам тигәс кенә, үҙең өйҙән сығып һыҙырға булдыңмы? Балаларыңды, донъяңды, һыйырыңды аңһат ҡына ир елкәһенә ҡалдырмаҡсыһыңмы? Килеп сыҡмаҫ! Һин ҡыҙҙар кеүек һикерәнләп йөрө, ә бында ауырыу ирең донъя көтһән!

– Һуң, һиңә путёвка биргән кеше юҡ бит әле...

– Ә-ә-ә, минең эш урынымды ғәйепләмәксе булаһыңмы әле? Һин ебәр! Берҙән-бер ireңә ғүмер эсендә бер тапҡыр путёвка алырға аҡсаң йәлкеме әллә?

– Ярай, тыныслана күр! Тәүҙә үҙем барып, йәшәү-ашау шарттарын, дауалау кимәлен тикшереп ҡайтайым да, һәйбәт булһа, һине лә ебәрермен.

Йәнкиҫәгемде ошолай өмөтләндереп, шифаханаға китеп тә барҙым. Һәйбәт ҡаршы алдылар. Ике кешелек бүлмәгә урынлаштырҙылар. Гел юғары категориялы табиптар ҡарай. Ә ниндәй генә процедуралар юҡ! Тоҙло шахтала ятам, циркуляр душта ла торам, углекислый ваннаһын да ҡалдырмайым. Шәп бит әй! Ә һуҙылып ятып, мачо-егеттән массаж яһатыуҙары! Кеше бешергән әҙер аҙыҡты кинәнеп ашауҙары үҙе бер ғүмер! Һәр кис төрлө күңел асыу саралары ойошторалар.

Ҡасан парлашып бөткәндәр, тегендә лә “хи-хи-хи,” бында ла “кети-мети”. Минең ҡылды ла тартҡылап йонсоттолар...

«Ерҙәге ожмах»та үткән көндәр һиҙелмәй үҙҙы ла китте. Өйгә ҡайтырға ла ваҡыт етте. Ишекте асып инеп, йәнекәйемде бер һурып үптем дә, тотондом һөйләргә:

– Һинең өсөн ҡыуанып бөтә алмайым, йәнкиҫәгем! Әлдә генә тәүҙә үҙем барғанмын. Ыҙалап ятыр инең унда. Табиптары ла, процедуралары ла ышту больницта, ышту бында. Ә менюҙары! Унда “һинең, нимә ашағың килә”, тип һорап тормайҙар. Бешергән нәмәләре, Хоҙайым, ауыҙға алғыһыҙ. Яратһаң да, яратмаһаң да, ашарға тура килә. Көнө буйы плитә янында бейеп торған ҡатының булмағас, ас йөрөүең дә бар.

– Дә-ә, ҡатын! Һинең һөйләүеңә ҡарағанда, мин ял итергә хыялланған шифахана өйҙә икән бит!

– Шулай шул, ҡәҙерлем, әллә ҡайҙа ыҙа сигеп йөрөгәнсе, ошо курортында ғына йәшәй бир. Хәҙер бәлешем әҙер була, бешеп сыҡҡансы, ҡана, үҙеңә массаж яһап торайым, тайский тигәнен!

**Ләлә ХӘСӘНОВА.**
Туймазы районы.

А. ВАСИЛОВ



**– Йылымымды балыҡ инспекторы тартып алды...**
– Инспектор рыбнадзора невод конфисковал...




А. СЕВАСТЬЯНОВ

Р. ЮНЫСОВ



# Көнсөл әтәс

**Мәсәл**

Үҙ балаһын, миңә оҡшамаған, тип
ғауға күтәреүселәр күбәйҙе.

*Әтәс Тауыкты кыҙғанып,*
*Бәләһен һала нахак:*
*– Мин кыҙылмын, һин караһың,*
*Ниңә, – ти, – кукәйең ак?*

*Ак тауык гел актан һала,*
*Һиңә бик калды күңел.*
*Ниңә, – ти, – һинең күкәйең*
*Кыҙыл, йә кара түгел?*

**Әкрәм ҠӘЙЕПҠОЛОВ.**
Баймаҡ районы.

# ХЫЯЛ

**(Сипайловола йәшәүсе ауыҙынан)**

Хыялланырға тиһәң, Хәйерланамды ҡуш инде. Бер көндө ул, ямғыр яуһа, бөтә Сипайловоны һыу баҫа, әллә йорт майҙансығында ҡош-ҡорт аҫрай башлайыммы икән, тигән уйға батты. Ағай ап-аҡ ғорур аҡҡоштарҙы, уларҙың “сыбыҡ осо” туған-тыумасаһы ҡаҙҙарҙы күҙ алдына баҫтырғас, тамағын ҡырҙы.

Машиналар баҫты бөтә ерҙе, бала-сағаға уйнарға урын юҡ. Һатып алған ерҙәре бар тиерһең, йорт алдарына тимер аттарын ҡуялар ҙа ҡыҙыл сепрәкле бау менән ураталар, йәнәһе, бүтән әҙәм һуғылмаһын! Төндә ептәрен өҙәм дә шлагбаум ҡуям, кергәндә лә, сыҡҡанда ла аҡса түләһендәр. Эх, сереп байыр инем! Ә бәлки, Ҡариҙелде йырып, һыуын урамдарға бороп ебәрергәлер? Көрәк тотоп сығам да дамбаны ҡаҙый башлайым, тәк тә юлдарҙы машиналар һәләк итеп бөтөргәндәр. Балаларын коляскаға ултыртып, саф һауа һуларға сыҡҡан әсәйҙәр туҙанға тонсоғалар. Ярай мәсет һалғас, тирә-яҡҡа асфальт түшәнеләр. Улай тиһәң, мәсет эргәһендә генә автостоянка, кибетенә инәм тиһәң, противогаз кейергә кәрәк.

Лутсы тар урамдарҙы киңәйтергә кәрәк, берәй сәғәт “пробкала” торһаң... Зато Хәйерланам мунсаға йөрөмәй, автобуста “мунса керә” лә, тешләшкән мунса хаҡын кеҫәһендә ҡалдыра. Шуныһы насар: тирләп-бешеп туҡталышҡа сыҡҡас, һалҡын алдырыуың бар. Бер мәлде шулай булды ла. Китте маршал Жуков урамында урынлашҡан поликлиникаға. Иртәнге сәғәт ете. Әллә демонстрация инде? Сират икән!

Сәғәт һигеҙҙә поликлиниканың ишеге асылды, ағым вахтёрҙы аяҡ аҫтында ҡалдырып, регистратураға ағылды. Тығыҙ кеше “эндо”ға әләкте, икенсе көндө – һигеҙ, өсөнсө көндө биш әҙәм бәхеткә ирешеп. Ике йөҙ мең кешеле Сипайловола өс көн эсендә егерме ике кеше эндокринологка инергә талон алды. Был мөғжизә түгелме?

Ике аҙна ятты түшәктә Хәйерланам. Әле терелеп килә...

Әллә маршал Жуковтың һәйкәле ултырған баҡсаны арендаға алып, сәскә сәсәйем микән? Барыбер ташландыҡ хәлдә, ундағы сүп-сар, шешә-фәләнде йыйыштырып алам да...

– Хәйерланам, мин кибеткә ашҡа һөйәк алырға сығам!

Ҡатынының тауышы уны уятҡандай һиҫкәндереп ебәрҙе.

– Донъя матур! Донъя киң-ң-ң!

Ағайҙың йырын боҙоп, күршеһе стенаға һуҡты.

– Юҡ-ҡ-ҡ! Аҡҡош йөҙҙәртергә ирек бирмәҫтәр! Ә түләүле пляж? Бының өсөн кәрәкле кешегә аҡса төртөргә кәрәк! Ә аҡса беҙҙә бер муҡса. Ә бәлки, ямғырҙарҙан һуң Сипайлово урамдарына пароход ебәрергәлер?..

**Фина ЛАТИПОВА.**
Өфө ҡалаһы.

*Оҙаҡ йылдар Башҡортостан Журналистар союзына етәксел ек иткән иҫ киткес сатирик журналдың баш мөхәррире, бихисап күңелле һәм етди китаптар авторы, беҙҙең кәҙерле дуҫыбыҙ һәм иптәшебеҙ, Рәсәй Журналистар союзының Федератив советы ағзаһы Марсель Сәлимовка 60 йәш тулды.*

*Марселде юбилейы менән ҡотлап, уның гел шулай тынғыһыҙ, сикһеҙ энергиялы, оптимистик юморлы яратҡан кешебеҙ булып йәшәүен теләйбеҙ.*

**Рәсәй Журналистар союзы секретариаты.**



Автошарж

# Ҡыҙыҡ түгел

**(Юмористың ҡыҙыҡһыҙ шиғыры)**

*Был донъяла*
*оҙаҡ йәшәп,*
*күпте күрһәң,*
*күпте белһәң,*
*күп нәмәнең*
*бәҫе китә,*
*ҡыҙығы бөтә...*
*Ғәҙеллеккә һис һөймәгән,*
*таҫма теле менән*
*гелән*
*кәкре ҡайынға һөйәгән*
*сәйәсмәндәрҙе тыңлауы*
*йәштәргә, бәлки, ҡыҙыҡтыр.*
*Ләкин миңә –*
*ҡыҙыҡ түгел!*
*Ҡарт ҡараҡтар урынына*
*йәш жуликтар ултырғанын,*
*ил байлығында ҡойонып,*
*шуҡ байҙарҙың*
*ҡоторғанын*
*ҡарап тороу*
*аңҡыштарға*
*бик ҡыҙыҡтыр.*
*Әммә миңә –*
*ҡыҙыҡ түгел!*
*Оятһыҙ ҡара йөҙҙәрҙе,*
*әрһеҙҙәрҙе, мән(е)һеҙҙәрҙе*
*лайыҡһыҙға маҡтағанда,*
*яуыздарҙы яҡлағанда,*
*гәйеплене аҡлағанда,*
*хаҡһыҙлыҡты хуплағанда,*
*ҡул сабыуҙар –*
*кемгә нисек,*
*әммә ләкин*
*миңә һис тә ҡыҙыҡ түгел.*
*Әйтеп тормайым ҡалғанын –*
*ҡыҙығы юҡ сөнки уның.*
*Был заманда*
*юмористың моң-зар түгеп*
*һөйләүҙәре кемгә ҡыҙыҡ?*
*Ҡыҙыҡ түгел!*

*2009.*



## ХӨКҮМӘТ ТЕЛЕГРАММАҺЫ

*Хөрмәтле Марсель Шәйнур улы!*

*Һеҙҙе иҫтәлекле юбилейығыҙ – 60 йәшегеҙ тулыу айҡанлы ихлас ҡотлайым!*

*Һеҙҙең бөтә тормошоғоҙ һәм күп яҡлы ижади эшмәкәрлегегеҙ – тыуған халҡыбыҙға һәм яратҡан эшегеҙгә ихлас тоғролоҡ өлгөһө. Бөгөн Һеҙ республикала һәм илдә иң сағыу яҙыусы-сатириктарҙың береһе. Һеҙҙең журнал йәмғиәттәге кире социаль күренештәргә ҡаршы көрәштә һиҙелерлек өлөш индерә.*

*Һеҙҙең сикһеҙ талантығыҙ, бай тормош тәжрибәгеҙ, үткер кәләмегеҙ оҙаҡ йылдар тыуған Башҡортостаныбыҙ мәнфәғәте өсөн хеҙмәт итәсәк әле!*

*Һеҙгә һәм Һеҙҙең яҡындарығыҙға именлек һәм бәхет, яңы ижади уңыштар теләйбеҙ!*

**Башҡортостан Республикаһы Президенты**
**Мортаза РӘХИМОВ.**

*Тураһын әйткән – туғанына ярамаған, тиһәләр ҙә, сәсән телле Мар. Сәлим үҙенең тура һүҙе менән халҡыбыҙға яраны, "Һәнәк"тең осло йәптәре менән тормоштоң яман яҡтарына ҡаҙалып, ил алдында хөрмәт-шөһрәт ҡаҙанды. Киләсәктә лә шулай ихлас көлдөрөп, тиҫкәреләрҙең йәнен көйҙөрөп йәшәһен!*

**Рауил БИКБАЕВ.**

# Сатирик булмаҫ инем

“... Керләнеп бөттөм үҙем, донъяны паклай алманым”.
Ғабдулла Туҡай.

*Утыҙ йәштә булғанда,*
*осло сатлы,*
*“Һәнәк” атлы*
*журналға баш мөхәррир*
*итеп мине ҡуйғанда,*
*алтмыш йәшлек түрәләрем*
*акыл һатты:*
*– Ҡустым, яуаплы урында*
*яуаплы тот үҙеңде,*
*үлсәп һөйлә һүҙеңде.*
*Ай-һай, телең бик әсе!*
*Һаҡ бул,*
*башың йәш әле...*
*Ағайҙарҙы тыңламаным.*
*Тыңламайынса,*
*уңдыммы,*
*уңманыммы –*
*аңламаным.*
*Тик үҙемсә эшләнем:*
*һис бер аямайынса*
*яуызлыкты тешләнем.*
*Кәмселектәрҙе фашланым.*
*Бюрократ, жуликтарҙы,*
*ришүәтсе, караҡтарҙы,*
*ялағай, аумакайҙарҙы,*
*алкаштарҙы, ялҡауҙарҙы*
*пыр туҙҙырып ташланым.*
*Бөтһөн улар,*
*булмаһын тип,*
*арабыҙҙа ҡалмаһын тип,*
*ғүмеремде тулыһынса*
*сатираға бағышланым.*
*Тик ни ғәжәп,*
*күпме генә көрәшһәм дә,*
*ни саклы күп көс түкһәм дә,*
*ерҙә яуызлыҡ бөтмәне.*
*Уны еңер өсөн*
*минең*
*бер ғүмерем етмәне.*
*Нишләргә?*
*Мираҫ итеп ҡалдырам*
*был көрәште –*
*ауыр, ләкин изге эште –*
*йәштәргә!*
*Алтмыш йәшем тулғанда,*
*йомро башлы хужаларға*
*хеҙмәт итеп туйғанда,*
*утыҙ йәшлек түрәләрем*
*бармаҡ һелкеп өйрәтә,*
*кисәтеп, миңә әйтә:*



*– Ағай, телең бик әсе!*
*Ҡара уны,*
*уйлап һөйлә,*
*йәшәйһең бар бит әле!*
*Ә мин һаман әүәлгесә,*
*элекке ғәҙәтемсә:*
*күпте “белгән” ҡустыларҙы*
*тыңламайым,*
*уларҙы һис аңламайым...*
*Әгәр ҙә мин ғүмеремдә*
*түрәләрҙе тыңлаһам,*
*арбаларына ултырып,*
*улар йырын йырлаһам,*
*сатирик булмаҫ инем.*
*Тыуып та тормаҫ инем!*

*2008.*

***Көсәнеп кенә сатирик булып булмай. Ул сифат тәбиғәттән килә. Марсель Сәлимовты сатирик итеп тәбиғәт яратҡан. Шуға ла уның оҙаҡ йылдар сатира журналын етәкләүе тәбиғи.***

**Марат КӘРИМОВ.**

***Марсель Сәлимовтың күңел түрендәге ижади маҡсаты: уҡыусыны таң ҡалдырыу, уға тормошобоҙҙағы күп күренештәргә яңыса ҡарауҙа булышыу, үҙеңде саҡ ҡына булһа ла яҡшыраҡ, киң күңеллерәк итеп үҙгәртергә ярҙамлашыу. Уның әҫәрҙәре уҡыусыны фекерләргә өйрәтә, тимәк, тағы ла аҡыллыраҡ булырға, изгелеккә, яҡтылыҡҡа, намыҫлылыҡҡа һәм ғәҙеллеккә саҡыра. Улар үҙҙәренең актуаллеге менән айырылып тора. Авторҙың көлөүе һәр ваҡыт социаль яңғыраш таба, сөнки уның геройҙары халыҡ тормошонан алынған.***

***Үҙем менән сағыштырғанда сатира цехы буйынса йәш коллегам, Рәсәйҙең талантлы яҙыусы-сатиригы Марсель Сәлимовтың ижади ҡаҙаныштарына шатланам.***

**Сергей МИХАЛКОВ.**

## Беҙ капсыкта ятмай

*Яңы ғына диплом алған берәү радиоға эш һорап килә.*
*– Ҡустым, иң тәүҙә берәй шәп кенә мәҡәлә килтер, – тиҙәр уға.*
*Егет ике лә уйлап тормай үҙе тыуып-үҫкән районнан тапшырыу әҙерләргә була. Әммә ни ғәләмәт, күпме генә маташмаһын, уйлағанын матур ғына итеп ҡағыҙға төшөрә алмай ҙа ҡуя икән. Ахырыһы ярҙам һорап, «Һәнәк»кә килә.*

# Ауылым батырҙары

Беҙҙең Әбйәлил үҙенең моңло йырсылары, үткер ҡәләмле әҙиптәре менән генә дан тота тиһегеҙме? Һис тә улай түгел. Арыҫлан йөрәкле, ҡурҡыу белмәҫ ҡатын-ҡыҙҙары менән дә шөһрәтле беҙҙең яҡ.

Таштуй ауылында йәшәүсе Нурикамал Ғәббәсова тигән апайыбыҙ үҙе генә ни тора!

Ауылдағы башҡалар кеүек, Нурикамал апай ҙа рәхәтләнеп газ яғыулығы менән кинәнә. Эй, рәхәт тә инде, ятһаң йылы, торһаң йылы. Ҡаштыр-ҡоштор килеп мейес яғаһы юҡ, илла-аллаға утын әҙерләйһе түгел. Һуңынан унынһын килтерәм тип тағы бер хыялый булаһың. Ана шул рәхәтлеккә иҙерәпме, апайыбыҙ газ тотонған өсөн иҫәпләшергә кәрәклеген дә онота. Әллә коммунизмда йәшәйбеҙ тип уйлаған инде. Тикшереүселәрҙең:

– Аҡыллым, улай ярамай бит, башҡаса насар ҡыланма, – тип иҫкәртеүе унын ике ятып бер төшөнә инһәсе.

Инде тамам биҙрәгән тикшереүселәр бер көндө йәнә килә лә кейеҙ ҡолаҡҡа әүерелгән ҡатындың газ торбаһын шарт өҙә лә китә.

– Яҡшылыҡты аңламайһың икән!

Ҡыйыу апай аптырап ҡаламы һуң? Өшөп ултырып булмай бит инде. Велосипед камераһын табып алып, торбаның өҙөк урынын йәһәт кенә тоташтыра ла ҡуя. Унын өсөн әллә ни аҡыл кәрәкме ни?

– Уй, ҡыҙый, үтә ҡурҡыныс эш менән булаһың түгелме? – ти кемдер. – Ул-был булып, шартлап-фәлән ҡуйһа?

– Һы, шунан да шөрләп торһаң, был донъяла йәшәүе ни һан!

Нурикамал апай кинәнеп, йортон йылытыуын дауам итә. Ҡаҙанда тәмле еҫтәр сығарып аш бешә.

Күпмелер ваҡыттан теге тикшереүселәр йәнә килеп сыға. Әммә, ни ғәләмәт, улар унын батырлығын һис тә аңларға теләмәй икән. Апайҙың был ҡылығын енәйәт эше тип баһалап, үҙен шартлы рәүештә ике йылға хөкөм итәләр.

Студент егеткә башындағы уй-хистәрен сыймаҡларға **В. АЙҘАРОВ** ярҙам итте.

**Юныс ЗӨБӘЙЕРОВ**

# Өс бәхет

Юмореска

Өс бәхет бер юлы килеме кешегә? Нинә юҡ нәмә һорайһың, тиерһегеҙ. Бер бәхет килһә лә әле бик шат булырһың. Шулай ҙа, һирәк осраҡтарҙа, кешегә өс бәхет тә бер юлы килеп ҡуя икән. Бына Самат менән булған бер ваҡиғаны һөйләйем. Кешегә өс бәхет бер юлы килгәненә үҙегеҙ ҙә нык ышанырһығыҙ.

Һеҙҙән йәшереп булмай, бизнесмен булырға хыяллана ине Самат. Әммә төҙөлөштә ҡара эшсе булып эшләргә яҙған икән. Эштәр әлегә шулайыраҡ тора. Бизнесмен булырға хыялланған кеше төҙөлөштә ҡара эшсе булып йөрөһөн инде. Ғәрлек, валлаһи.

Ләкин бәлә бының менән генә бөтмәй. Өҫтәүенә прораб бәйләнә. Прогул яһайһың, ти. Тағы бер прогулың булһа, эштән ҡыуам, тигән ине инде. “Ҡара уны, бер ниндәй мәрхәмәт тә, шәфҡәт тә булмаясаҡ, тағы прогул яһаһаң, бүре билеты биреп сығарам”– тип тә өҫтәгәйне. Кисә Самат тағы прогул яһаны ла ҡуйҙы. Кис менән эсһә, иртән бер ҙә эшкә бараһы килмәй шул унын. Эштән ҡыуһалар, ҡайҙа барып төртөлөр? Торорға урыны ла юҡ. Бында ла дөйөм ятағы бар тип

## Туҙға яҙмағандарҙан

*«Әй һин өндәшмәйерәк тор, колағыңдағы тукмастарың кибеп бөтмәгән!»*
(Әрләшеүҙән.)

*«Мыйыҡ үҫтерер өсөн, егеттәр, һеҙгә әле бик күп белем кәрәк».*
(Бер ҡарт ауыҙынан.)

**Әлфиә РӘХИМБАЕВА** ишетте.
Әлшәй районы.



Р. ЮНЫСОВ

кенә урынлашҡан ине. Әлегә прораб күренмәй. Күренһә, ниндәй ҡарар сығарыр, ул эт талағыры нәмә. Саматтың ҡан дошманы.

Шулай ҙа Самат эштән ҡыумаҫтарына өмөт итә. Һәр кешенең фәрештәһе барлығына ышана ул. Тимәк, Саматтың да уны һаҡлай торған үҙ фәрештәһе бар. Шул Саматтың фәрештәһе уны ҡотҡарыр өсөн берәй яйын табыр әле. Был эштән дә ҡыуһалар, ҡайҙа барырға ла белмәҫһең. Ҡулынан килгән башҡа һөнәре лә юҡ.

Самат раствор һалынған носилканың бер яғын тотҡан. Камил – икенсе яғын, өсөнсө ҡатҡа менеп баралар. Ауыр, ләкин нишләйһең. Бер өйҙә ремонт яһай улар, бер стенаһын өр-яңынан күтәрергә кәрәк булды. Саматҡа, ҡара эшсегә, ташсылар, һөнәр эйәләре булараҡ, бойороҡтарын биреп кенә торалар, дөрөҫөрәге уларҙың икеһенә бер ярҙамсы Камил бар.

Камил хәйләкәр кеше. Самат носилканы күтәреп барғанда, бармаҡтары йомшарып, носилка төшөп китә яҙғас, носилканы, көсөн йыйып һикертеп, уңайлыраҡ итеп тотҡайны, эштең нимәлә икәнен теге һиҙеп ҡалды. Тултыра башланы носилкаға растворҙы! Камил Саматты носилканы төшөрөп ебәрер тип уйлай, ҡулынан ысҡындырһа, бөтә бригада менән көләсәктәр быуыны нығымаған Саматтан. Тик Самат та кеше. Тешен ҡыҫып, иренен сәйнәп, носилканы урынына килтереп еткерә. Планы барып сыҡмағанға Камилдың йән асыуҙары сыға.

Шул ваҡыт прораб күренде, Саматты саҡырып индерҙе лә:

– Эштән ҡыуам тинем, ҡыуам! – тип ҡысҡырҙы. – Эш кейемеңде кладовщицаға тапшыр ҙа, бүтән бында эҙең дә булмаһын!

Самат ни әйтергә лә белмәй торғанда, кемдер “атас!” тип ҡысҡырҙы. Прораб менән Самат башын күтәрһәләр, бер кирбес төшөп килә. Нәҡ Самат башына төшә кеүек.

– Бына һиңә Ғазраил телеграммаһын ебәрә, – тине лә прораб, шатлыҡлы йылмайып, үҙе ситкә һикерҙе.

“Һиңә яҙаны мин үҙем бирермен”, – тип уйланы асыуы килгән Самат. Шулай уйлауы булды, кирбес прорабтың башына килде лә төштө. Ыңғырашмай-нитмәй ауҙы ла ҡуйҙы теге. Ярай, кепкаһы бар ине, ҡаны сыҡманы. Оҙаҡламай “тиҙ ярҙам” күрһәтә торған машина килеп етеп, прорабҡа беренсе ярҙам күрһәттеләр.

Теге, аңына килгәс, Саматҡа ҡарап:

– Ярай, эшлә инде эшеңдә бер юлға. Һинең арҡала әллә ниндәй ҡаза күрерһең – тине.

Тик тороп баҫырлыҡ түгел ине ул – уны больницаға алып киттеләр.

“Өс бәхет бер юлы килһә килер икән, – тип уйланы Самат таң ҡалып. – Беренсенән, кирбес минең башҡа төшмәне. Икенсенән, кирбес минең ҡан дошманым башына төштө. Өсөнсөнән, эштән ҡыумаҫҡа булды ул ләғнәт төшкән шул кирбес арҡаһында. Фәрештәм эше генә был, башҡа бер кемдеке лә түгел”.




– Һеҙ минең улыма музыкант булырға камасаулайһығыҙ!
– Ә һеҙ – футболсы булырға!
– Вы мешаете моему сыну стать музыкантом!
– А вы – стать футболистом...

Риф МИФТАХОВ

## Мөғжизә

Ҡатын һөйәркәһе менән,
Килтереп бар шартына,
Ятҡанда ишек ҡаҡтылар:
Ир йәшенде өҫтәлдәге
Телевизор артына...

Инде лә Хәй, ҡарап тормай
Карауатҡа, юрғанға,
“Футбол!” тигән бер һүҙ менән
Текәлде экранға,
Әйтерһең, бар донъяға...

Ҡатыны саҡырҙы шул мәл
Кухняға – мөғжизәгә:
Имеш, ашы түгелмәгән
Ҡапыл төшөп китһә лә,
Иҫән-һау тәрилкә лә.

– Ерунда! – тине Хәй быға, –
Һөжүмсене, нигеҙһеҙ,
Ҡыуғас судья, – вот мөғжизә! –
Минең яндан сығып китте
Футболсы... трусикһыҙ!

Шаҡ ҡатыуҙан ир-ҡатындың
Ҙур асылды ауыҙҙар.
Иҫкә килгәс: “Мөғжизә! – тип,
Ҡысҡырышып-ҡосаҡлашып,
Карауатҡа ауҙылар...

Булғанда шәп көйәрмәндәр,
Килгәндә һөйәркәләр,
Тормошта тыуып торасаҡ,
Һөйләһәң әҙәм ышанмаҫ,
Ошондай ғәжәп хәлдәр.

## Уҫал эт

– Донъя ауыр яңғыҙ башҡа,
Нисек итеп дуҫ табырға?
– Ысын дуҫым булһын тиһәң,
Һиңә кәрәк эт алырға.

– Уҫал эт тә кәрәк ине,
Ҡарар өсөн йортто бик ныҡ.
– Ул сағында өйлән, дуҫым,
Бисәнән дә уҫал эт юҡ!

## Ауыр хәл

– Ҡарале, бынау универмаг
Янында ниндәй гөлдәр!
Тыуған көнөңә шуларҙы
Алырмын, иркәм Гөлдәр!

– Универмагтың эсен күрһәң:
Алтын алҡа, муйынсаҡ!
Таҡҡан инем, бәхетемдән
Йығылмай ҡалдым саҡ-саҡ!



Ҡаршы килһәң, ҡатынының
Өйәнәк – иҫ китмәле...
Хәҙер Хәмит үҙе шул мәл
Саҡ-саҡ ҡолап китмәне.

## Балыҡ тотоу

– Кисә һеҙҙе күреп ҡалдым,
Үткәндә Дим туғайын.
Янында йәш сибәр ине,
Ҡыҙыңдыр ул, моғайын?

– Ҡыҙым булмай!.. Балыҡ тотоҡ,
Ниңә эшһеҙ ятырға...
Тик һин беҙҙе күргәнеңде
Һөйләп ҡуйма ҡатынға.

## Яза

– Йыл да ял итеп ҡайтаһың,
Ожмахта булаһыңдыр:
Ҡатын-ҡыҙҙар ҡосағынан
Яңынан тыуаһыңдыр?

– Көлмә, дуҫ, “ожмах” язаһын
Ҡалам үҙеңә теләп:
Һиңә лә яҙһын барырға
Үҙ ҡатыныңды тейәп.

## Иҫләмәй

– Иҫеңдәме, бер йыл элек
Минән биш йөҙ алып торҙоң?
– Ниңә шундуҡ һораманың?!
Һиндә ғәйеп – онотторҙоң...

– Уның ҡарау быңа хәҙер
Төшөрҙөм бит һинең иҫкә.
– Иҫләмәйем... Булмағанды,
Кит, ауҙарма минең өҫкә!

## Ҡыҫҡартҡан

– Кисә һөйләштек бит, Нәғим,
Эсеүеңде ҡыҫҡартырға.
Ниңә кәрәк булды тағы
Өйгә шулай ләх ҡайтырға?!

– Дөрөҫ, бисә, кризис мәле
Ир-ат тейеш һүҙ тоторға:
Ин-фля-ция... Бик һаҡ кәрәк...
Мин ҡыҫҡарттым... бер йотомға!

## Кәмидиә

– Театрға барҙым әле,
Ҡарарға кәмидиә!
– Нисегерәк, йүнле булһа,
Ҡарарға ине мин дә.

– Бара ҡалһаң, ҡайтырға сыҡ
Бер тиклем ваҡыттан һуң:
Кейем алырға уңайлы
Икенсе акттан һуң.

– Ни һөйләйһең?! Ниңә ҡайтыу
Икенсе акт үткәс?
– Гардеробта баш тыҡҡыһыҙ,
Беренсе акт бөткәс!

## Сара тапты

Уҡып белде Баҙыйхан:
Бактиһәң дә, бауырҙан
Араҡы сығып юғала
Тик бер тәүлек уҙыуҙан.
Сара тапты Баҙыйхан:
Хәҙер көнө-төнө эсә,
Ҡурҡып айнып ҡуйыуҙан.

## Шатлыҡ

– Шамил, ниндәй шатлығың бар,
Ауыҙ ҡолаҡҡа еткән?
– Теш врачына барғайным,
Шатланмай – ялға киткән!

Р. ЮНЫСОВ









# КЕМ наҙаныраҡ?



**Ғәбит САДИҠОВ**

*Мәғәнәһен белмәгән һүҙ ҡыҫтырып һөйләү – мәғәнәһеҙлек.*

Өфө – Шишмә электричкаһына шаулаша-көлөшә бер төркөм ҡыҙҙар ултыра. Кейемдәренә, ҡыланыштарына ҡарағанда, талибә икәндәре әллә ҡайҙан күренеп тора.

Вагон тәҙрәһенән ҡарап барған бөхтә кейемле оло йәштәрҙәге ҡатын, килеп ингән ҡыҙҙарға урын биреп, тәҙрәнән ситкәрәк шылышып, ябай ғына сумкаһынан китап, күҙлеген алып, уҡый башланы. Әлеге ҡыҙҙарҙың береһе, эйәге менән әбейгә ымлап, эхирәттәренә:

– Был әбей Эзотоп теле менән әйткәндә, беҙгә үҙенең уҡымышлылығын күрһәтергә булды шикелле, акиәт уҡырға кереште, – тине, мыҫҡыллы йылмайып.

Ҡыҙҙар ҡатынға серле ҡараш ташланылар. Ҡатын ҡыҙҙар ҡыланышын тиҙ төшөндө булһа кәрәк, ул һүҙ башлаған ҡыҙыҡайға:

– Балаҡай, бәлки Эзоптыр? – тине. – Боронғо гректарҙа Эзоп исемле аҡыл эйәһе булған. Ул беҙҙең эраға тиклем алты йөҙ йылдар элек йәшәгән. Дүрт йөҙҙән ашыу, хәҙерге көндә лә ҡиммәтен юғалтмаған, өлгө булырлыҡ мәсәлдәр, әйтемдәр ҡалдырған. Уның тапҡыр һәм үткер телен хөкөм һөрөүсе ғалимдар яратмаған, әлбиттә. Уны, кәфенгә урап, бейек ҡаянан диңгеҙгә ташлағандар.

– Ҡыҙҙар, көлөүҙән туҡтап, ҙур иғтибар менән әбейҙе тыңлай башланылар.

– Ә инде Эзотоп тигәнең, дөрөҫөрәге изотоп, ҡыҙым, был һүҙ химия фәнендә бар. Хәтерем яңылышмаһа, ул төшөнсә бер үк химик элементтың атом ауырлығы радиоактивлығы менән айырылған төрҙәрҙе аңлата, – тип һүҙен дауам итте әбей. – Ҡыҙым, минең ҡулымдағы китап акиәт түгел, ә бөйөк тәғлимәт – Ҡөрьән Кәрим!

Ҡыҙҙар әбейҙең мәғлүмәттәрен ишеткәс, тынып ҡалдылар, уға ҙур ихтирам менән ҡарай башланылар.

Әбей һүҙ башлаусы ҡыҙға:

– Ҡыҙым, үҙеңдең исемең кем? – тип тағы өндәште.

– Гөлнара мин, әбей, Гөлнара!

– Ата-әсәң ниндәй матур исем ҡушҡан үҙеңә, рәхмәт төшкөрө. Бер ҙә Эльза-Мильза түгел, ә Гөлнара! Ул исем, ҡыҙым, йылы яҡтарҙа үҫә торған емеш ағасының сәскәһенә бәйле. Иншалла, исемең есемеңә тура килһен. Балаҡайҙар, һәр һүҙҙе әйтеүҙән элек, уның мәғәнәһен белергә тырышығыҙ. Зыяны булмаҫ.

– Әбей, ғәфү итегеҙ, һеҙ кем, ғалимәме шағирәме.

– Мин, балаҡайҙар, ябай башҡорт әбейе.

# Котлауграмма

***Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, радио һәм телевидение дикторы Әхәт МОРТАЗИНға – 50 йәш***





**Йөрәккә һары май кеүек –**
**һөйләп ебәрһә Әхәт.**
**Уның тылсымлы тауышын**
**Тыңлауҙары рәхәт.**

*Һәнәк.*




–Йптәш Сабитов, илдә финанс кризисы. Был бәлә беҙҙең предприятиены ла урап үтмәне. Мин, хужа булараҡ, һеҙгә әйтергә мәжбүрмен. Беҙ штатты ҡыҫҡартабыҙ, ә һеҙ шул кешеләр иҫәбендә. Ғәфү итегеҙ...

Был һөйләшеүҙән һуң бер нисә көн үтте. Бер нәмә лә үҙгәрмәне. Тышта шул уҡ ҡыш. Өйҙә шул уҡ иртәнге сәй. Төшөн – йоҡо, ә кисен – телевизорҙағы – ялҡытҡыс тапшырыуҙар. Ә төн уртаһы етеүгә, тағы ла бөтмәҫ уйҙар ҡаңғырта. Тәмәке артынан тәмәке тартмай ни сараң бар. Ҡайҙа ҡасып китергә? Хәйер кемгә минең кәрәгем бар?

Ә икенсе көн кис етеүгә, ниндәйҙер көс кешеләр янына барырға кәрәклеген һиҙҙерә башланы. Мин яҡты янған уттарға табан атландым. Юлда кафе осраны. Шунда барып керҙем. Ике-өс өҫтәлдә парлашып ултырған кешеләрҙе күреп, күңелемә йылы керә башланы. Бер стакан кофе һәм бер ҡап тәмәке һатып алдым. Күрше өҫтәлдә һыйлы табын артында ир менән ҡатын матур итеп һөйләшеп ултыралар. Өҫтәлдәрендә ир бүләк иткән сәскәләр ята. Йыр-моң тымып ҡалыуға, ҡатын ҡапыл ҡалағын тәрилкәгә ташланы ла:

– Һин мине нахаҡҡа рәнйетәһеңме?! – тип иренә ҡысҡыра башланы.

– Тыныслан, бәғеркәйем, кеше ҡарай, – тине ире, тирә-яҡҡа күҙ ташлап.

– Юҡ, кеше ишетһен! Һин мине нимәләлер ғәйепләйһең! Миңә ышанмайһыңмы?! Кеше һүҙенә ышанып шулай эшләйһеңме?

– Юҡсы. Тыныслан.

– Юҡ! Хәҙер инде мин бер ҙә тыныслана алмайым! Һин шул һүҙҙәрҙе әйтергә мине бында саҡырҙыңмы?!

– Беләһеңме, һин кем?! Һин, һин... Ир түгелһең! Һин был донъяла бер кем дә түгелһең! Мин һине яратмайым!.. – Ҡатын ҡулындағы балдағын сисергә маташты. Уныһы, башҡа ваҡытта йәһәт кенә сиселә торған нәмә, ниңәлер бармаҡҡа йәбешкән шикелле сиселмәй ыҙалатты.

Ниһайәт, балдаҡты ирҙең битенә ҡарай һелтәне лә ҡатын тышҡа ынтылды. Ир ҡатынды туҡтатырғамы, иҙәндәге балдаҡты эҙләргәме – ни эшләргә лә белмәне. Ә балдаҡ тәгәрәп минең аяҡ аҫтына килеп ятҡайны инде. Әлбиттә, был ғауғала уны үҙемә эләктерергә була ине. Кеше нәмәһенә тейеп өйрәнмәгәс, иҙәндән алып балдаҡты иргә тапшырҙым. Ул, миңә рәхмәттәр уҡып, сығып йүгерҙе. Кафела тағы тынлыҡ урынлашты. Йыр-моң яңғырай башланы. Бер аҙҙан бындағылар бейешеп алған булдылар. Ә барыбер ниңәлер күңелһеҙ ине. Кафенан сығырға уйлағайным, шул мәл әлеге ир менән ҡатын тағы килеп инделәр. Ҡатын йылмая башланы. Ә ире миңә күҙ ҡыҫты ла:

– Шампанский һәм коньяк! – тип хеҙмәтләндереүсе ҡатынға ҡысҡырҙы. Күрше өҫтәлдәгеләр иплән кенә үҙ-ара бышылдаша башланылар. Бына бер саҡ, теге ир коньяк тотоп, минең өҫтәлгә килеп ултырҙы ла:

# ТАНГО

**Хикәйә**

– Беләһеңме, дуҫ, мин бит уны яратам. Мин уның өсөн... Ғөмүмән, нимә теләй, шуны алып бирәмен. Бәлки, яман өйрәткәнмендер? Ә ул минең ҡәҙерҙе белмәй. Һин нисек уйлайһың, дуҫ? – тип һүҙ башланы. Бынан һуң беҙ уның менән оҙаҡ ҡына һөйләшеп ултырҙыҡ. Мин уға үҙемдең тормош тәжрибәһен һөйләнем. Ваҡытында килеп ултырған иргә күңел ғазаптарын һөйләгәс, ниңәлер, миңә лә еңел булып китте.

Шул мәлдә, ҡатынды бөтөнләй иҫтән сығарып ебәреүҙе һиҙеп, уның яғына ҡараныҡ. Ә ул икенсе ҡатындар табынына барып, улар менән нимәлер һөйләшә ине. Күрәһең, ирҙәрҙе ғәйепләп ултыралар.

Бына бер саҡ динамиктарҙан сихри моң һирпелде. Ир ҡатынға ҡарай атланы ла уны бейергә саҡырҙы. Ә ул, урынынан тороп, миңә ҡарай йүнәлде. Минең йөҙөм ҡыҙарып, йөрәк тынғыһыҙ һуға башланы. Аяҡтар ҙа ҡалтырырға тотондо, ҡатындың саҡырыуын ҡабул итмәй, урынымда ултыра бирҙем, ә ул һаман мине бейергә саҡыра. Шул мәлдә бөтә зал ҡыҙыҡһынып беҙгә ҡараны. Йәнәһе, нимә булыр икән? Мин, ҡатын-ҡыҙ һүҙен йыҡмаған ир булырға тырышып, бейергә төштөм. Был ханым менән үҙемде һауаға осорлоҡ ҡанатланғандай тойҙом. Әйтерһең, янда яҡты йондоҙҙар балҡый... Бер саҡ тағы ла залда тынлыҡ урынлашты. Ҡатын менән бер-беребеҙгә ҡарайбыҙ. Был тынлыҡты ир боҙҙо. Ул, уны етәкләп, бәғеркәйе менән бейергә маташты. Ҡатын да ҡаршылашманы. Ә ир уның эргәһендә улай ҙа, былай ҙа өрөлөп өҙгөләнде. Залдағы кешеләрҙең күҙҙәре һаман да беҙҙә... Хәлде аңлап, шым ғына ҡайтырға сараланым. Шул саҡ ҡатын минең яурыныма ҡулын һалды. Мин туҡтап ҡалдым. Оҙаҡ ҡына танғоға әйләнергә баҙнат итмәй торҙом. Ҡулдарымды үҙенең билена көсләп тигәндәй ҡуйҙы. Һөйләшеп ҡуйылғандай, залда тағы шул сихри моң ҡабатланды. Беҙ бейергә төштөк...

Бына көй ҙә бөттө. Мин, ҡатын ҡулын үбеп, ишек яғына ынтылдым. Шул мәлдә ир ҡысҡырып туҡтатты. Туҡтаным. Ул залдағы утты яҡтыртырға ҡушты. “Әгәр ҙә ирҙең миңә һорауҙары бар икән,– тип уйланым,– ҙур тормош тәжрибәләремдән сығып, яуаптарым ҡәтғи буласаҡ. “Холҡо нисек кенә булмаһын, ҡатынды яҡлаясаҡмын. Тышҡа сығып ирҙәрсә һөйләшергә кәрәк икән, һөйләшәсәкмен”. Бына миңә официант сәскә бүләк итә. Ә ир менән ҡатын яһалма персонаж булып сыҡҡан. Был үҙенсәлекле күңел асыу программаһы икән дә...

Ошо көндән алып, мин хәҙер кафела һөйәркә ролен башҡарыусы булып эшләйем. Бына бит, көтмәгәндә, ошондай һәйбәт һөнәр таптым! Бынан һуң, кризистың файҙаһы юҡ, тип нисек әйтәһең инде!

**Гөлназ МӘҮЛЕТҠОЛОВА.**
Баймаҡ ҡалаһы.



# “Ботаҡ” радиоһына ХАТТАР

(Репортаж)

Хөрмәтле радио тыңлаусы әфәнделәр, әфәндиәләр! “Ботаҡ” радиоһы үҙенең киске тапшырыуҙарын башлай. Хеҙмәтсәндәрҙән килгән хаттар буйынса концерт тыңлағыҙ. Беренсе хат:

“Хөрмәтле редакция, беҙҙең атайыбыҙ ауыл хужалығында тоҡом үгеҙе булып эшләне. Уның бер кәтәүҙә илле ҡатыны булды. Илле ҡатынынан биш йөҙ быҙау тыуҙы. Беҙ уның балалары хәҙер төрлө хужалыҡта һөт биреүсе, кәтәү үгеҙҙәре булып илебеҙгә хеҙмәт итәбеҙ. Беҙҙең атайыбыҙ Үгеҙбай хәҙер почётлы ялда. Уға ун дүрт йәш. Беҙ атайыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлайбыҙ һәм уны ҡотлап һеҙҙән йыр башҡарыуығыҙҙы һорайбыҙ. Уның балалары: Кәрәнсә, Йондоҙ, йәғни, биш йөҙ быҙауы.”

Хөрмәтле Йондоҙ, Кәрәнсә һеҙҙең һорауығыҙҙы үтәйбеҙ. Йыр яңғырай:

**Ҡара һыйыр ҡабырғаһы**
**Ала буламы ни ул.**
**Күңел биреп үбешмәгәс**
**Быҙау тыуамы ни ул...**

Икенсе хат. “Хөрмәтле редакция, беҙҙең әхирәтебеҙ, күршебеҙ Һыйырбикә Үгеҙовна ғүмере буйы баҡырыусы артистка булып эшләне. Уның баҡырыуын беҙ – Һарыҡ, Кәзә, Тауыҡ, Сусҡа – һоҡланып яратып тыңланыҡ. Һыйырбикә Үгеҙовна бигерәк тә беҙҙең ауыл хужалығында бесән, силос, ҡатнаш аҙыҡ етмәгән сағында моңло итеп классик формала баҡырҙы. Уның баҡырыуын магнитофонға яҙҙырып алып, радионан йырлаттылар. Уның ошо оло хеҙмәтен баһалап, атҡаҙанған исемен бирҙеләр. Бөгөнгө көндә Һыйырбикә Үгезовна пенсияла. Уға ун биш йәш тулды. Уны юбилейы менән ҡотлап, йыр тапшырһағыҙ ине”, – тип яҙалар уның күршеләре хөрмәтле Ҡаҙ, Әтәс, Кәзә, Һарыҡ, Сусҡа. Һеҙҙең һорауығыҙҙы үтәйбеҙ. Йыр яңғырай:

**Трамвай үтеп бара,**
**Трамвай үтеп бара.**
**Үгеҙ ҡайғыһы юҡ әле,**
**Ашарға бөтөп бара...**

Тағы ла бер хат. “Хөрмәтле редакция, беҙҙең Мөгөҙлө ауыл хужалығы ҙур уңышҡа өлгәште. Һөт таҙа булһын өсөн һыйырҙар хәҙер имсәктәренә бюстгалтер кейеп йөрөйҙәр. Уларҙың ошо хеҙмәт уңыштары менән ҡайнар ҡотлап, беҙҙән уларға музыкаль сәләм тапшырһағыҙ ине. Үтенеп һорап һауынсылар: Фәтиха, Сәлимә.”

Фәтиха, Сәлимә, һеҙҙең һорауығыҙҙы үтәйбеҙ. Йыр яңғырай:

**Ал булмай, булмай, булмай,**
**Гөл булмай, булмай,**
**булмай.**
**Һыйырбикә ҡайтып килә**
**Имсәген болғай, болғай...**

Бына тағы бер хат. “Хөрмәтле редакция, беҙҙең ауылыбыҙҙа ҡайһы бер ирҙәр эшләргә яратмайҙар. Бай бисәләргә йортҡа инергә тырышалар. Беҙҙең әсәйебеҙ ярлы ғына хужалыҡ малы булһа ла, атайыбыҙ Үгеҙғол әсәйебеҙҙе яратып өйләнгән. Бай һыйырҙар эҙләп йөрөмәгән. Уларҙың мөхәббәттәре саф. Атайыбыҙ Үгеҙғол артынан күп йәш һыйырҙар йөрөнө, әммә атайыбыҙ әсәйебеҙгә тоғро булды, ә инде йәш үгеҙҙәр үкереп-үкереп әсәйебеҙҙе һораһалар ҙа, әсәйебеҙ уларға эйәрмәне. Атайыбыҙ Үгеҙғолдоң, әсәйебеҙ Һыйырсафаның тиҙҙән көмөш туйҙары була. Уларҙы ошо байрамдары менән ҡотлап, йыр башҡарһағыҙ ине. Уларҙың балалары: Быҙау, Башмаҡ, Тана”.

Хөрмәтле Быҙау, Башмаҡ, Тана, һеҙҙең һорауығыҙҙы үтәйбеҙ:

**Ҡырға китә Ҡырмыҫҡа,**
**Ҡырға китә Ҡырмыҫҡа.**
**Фуфайкаһын күтәрә лә,**
**Ирҙәр сыға тормошҡа.**

Ошоноң менән “Ботаҡ” радиоһы үҙенең тапшырыуҙарын тамамлай, киләһе осрашҡанға тиклем хуш-һау булығыҙ!

*Тапшырыуҙы алып барыусы*
**Юнир САЛАУАТОВ.**



А. ВАСИЛОВ










# Дуҫтар күстәнәсе

**“CARICATURA.RU” интернет сайтынан.**








# *Алтын кала тутыктары*

*“Тыныслык урамы” туктальышында троллейбустан бер инәй төштө. Ҡулындағы таяғына таянып, йәшләнгән күҙҙәрен һөрткөләне лә көс-хәл менән Тыныслык урамы яғына юл тотто. Ә унда еткәнсе тағы ла бер квартал самаһы барырға кәрәк. Инәй хәл алырға туктап калды.*

*– Ҡайҙа былай ашығаһығыҙ? – тигән булдым уға.*

*– Ысынлап та, – тине инәй, – хакимдарҙан кемдәрҙер ашығалар шул, улым. Уйламайса эш итәләр, уйламайса.*

*– Нимәгәлер хәтерең калған, ахыры, инәй?*

*– Хәтере калғандар бер мин генә түгел, улым. Бына кара, 1-се поликлиникаға йөрөгән һәр сырхау рәнйей. Элек был туктальыш Геология-эҙләнеү контораһы эргәһендә ине. Ә хәҙер ярты сакрымға арырак күсерҙеләр. Поликлиникаға барып етер әмәл юк...*

*Эйе, Стәрлетамакта был тәңгәлдә уйланырлык урындар етерлек. Рәсәйҙең Алтын калаһына был биҙәк өҫтәмәй. Хата өҫтөнә хата. Мәҫәлән, маршрут машиналарын нисек кенә биҙәмәйҙәр. Берәүһенә хатта “Хоҙайбирҙин урамы” тигәнде “Улица Худазирбин” тип яҙғандар.*

*«Остановка Бабушкина» беҙҙеңсә «Өләсәйҙәр урамы» туктальышы була икән. «Калагаз» туктальышында «Кредитный потребительский кооператив граждан» тигән вывесканың тәржемәһен «Бурыс кредит кулланыусылар кооператив граждан» тип сәпәгәндәр. Октябрь проспектындағы «Заря» тигән магазиндың исемен «Шәрек» тип тәржемә иткәндәр.*

*Алтын кала һаман да тутык күренештәрҙән арына алмай.*

**Әмин АШҠАҘАРОВ.**

*✦ Яҙа юл язаға илтә*

# Кимматкә төшкән байрам



Николай Алфёров менән Рафаэль Насиров тигән егеттәр бик татыу, дуҫ булғандар. Береһе – Көнсығыш гуманитар университетының хоҡуҡ факультетында ғилем эстәһә, икенсеһе – «Домо» магазинында тир түгә. Берҙән-бер көндө йонсобораҡ киткән эшнәләрҙең, тормош мәшәкәттәренән онотолоп, культуралы ял иткеһе килеп китә. Китаптарға күмелеп ултырыу ҙа, һатыу эше лә, үгеҙ менән ер һөрөү кеүек булмаһа ла, түбәгә төкөрөп ятыу түгел инде. Ҡайһы ваҡыт ҡағыҙ-дәфтәрҙәрен ташлап, бер туҡтауһыҙ тегенеһен-быныһын төпсөнгән һатып алыусыларҙан әллә ҡайҙа сығып ҡасҡы килә.

– Ҡайҙа барайыҡ икән, был байрам башҡаларына оҡшамаһын ине, – тигән Рафаэль.

– Шулай шул, – тип уны йөпләй Николай.

– Кеше-фәлән булмаһын ине.

– Әйҙә киттек.

Сығып киткән, ти, былар кәйеф-сафа ҡорорға. Өфө районының Жуков ауылы янындағы ферма янына барып еткәндәр. Ә бында урман кеүек ҡоророп киндер үҫә. Әммә дуҫтарға тормоштоң рәхәтлегенә, донъяларҙың киңлегенә, һауаларҙың зәңгәрлегенә ләззәтләнеп ултырырға, шатлыҡтан берсә шашып көлөргә, берсә ҡороп иларға насип булмай. Ҡәһәр төшкөр, әллә ҡайҙан килеп сыҡҡан милиционерҙар бөтә байрам кәйефен ҡыйрата.

Күңел асырға өлгөрмәгән, егеттәрҙең байрам кеҫә яғына арыу ғына һуҡты – икеһенә лә 20-шәр мең һум штраф сәпәнеләр.

**В. ИСХАҠОВ,**
**Э. ӘХМӘҘУЛЛИНА,**
Өфө районы прокуроры урынбаҫары.

**Р. ЮНЫСОВ**



Кәүсәриә ШАФИҠОВА

## Шаҡ катырлыҡ



*Ирҙәрҙән дә былайырак*
*Ишетәләр бисәләр.*
*Ишетеү – ул нәмә генә, –*
*Сәкәштереп эсәләр.*

*Күҙҙәренә эрен каткан,*
*Ул сәсе, ул өс-башы!*
*Бына шундайҙарҙың береһе*
*Тап булды миңә каршы.*

*Үтеп кенә китһен ине,*
*Китәме һуң, тукталы.*
*Яңылыгын һөйләп китте,*
*"Мине, – ти, – ир тукманы!"*

*"Һәйбәт булган!" – тигән инем,*
*Акайтты ул күҙҙәрен,*
*Мине әрләп, теҙҙе генә,*
*Шак катырлык һүҙҙәрен.*

*"Минең хакта шиғыр яҙһаң!"–*
*Тип бармак та яны...*
*Куркманым, әммә был хәлдән*
*Йөрәк кенә каканы.*

## Әйт – түҙермен!

*Катынына әйтә Сәлим:*
*– Һанламайһың ир итеп.*
*Яратмайһың, һин бит мине,*
*Күрәһең бер сир итеп.*

*"Алкаш!"– тип әйтмә зинһар,*
*"Алкаш!" матур һүҙ түгел.*
*Шул һүҙеңде әйтеп куйһаң,*
*Төшә лә китә күңел.*

*"Суска, шакшы!" – тимә мине,*
*Үп һин мине, косып ал.*
*Беҙгә бергә йәшәйһе бит,*
*Мөхәббәтте һаклап кал.*

*"Кит, күҙемә күренмә!"– тип,*
*Әйтеп куйма, сибәрем!*
*Хәйер, бирһәң бер яртылык,*
*Әйт – барына түҙәрмен!*

# ТУНАП АЛЫНҒАН ТУН

**Юмореска**



– Йәнем, – тип иркәләп өндәште эшенән ҡайтып ингән ҡатыным, – һинең менән кәңәшләшәһе бар.

Мин алданыраҡ ҡайтҡанлыҡтан түр яҡ менән зал араһында буталып йөрөйөм. Әммә бер ерҙә лә шыжлаған тауыш булмағас, кәйеф тә шәптән түгел, телевизорҙан да, һәр сақтағыса, йүнле нәмә күрһәтмәйҙәр.

– Һиңә әйтәм, кәңәшләшәһе бар, нимә ишетмәмешкә һалынып йөрөйһөң?! – ти тағы ҡатын, әммә тауышында уҫаллыҡ ноталары ишетелмәй, нәмәгәлер тулҡынланғаны ғына һиҙелә. Ашыҡ-бошоҡ сисенгәнендә күреп ҡалдым: пакетҡа еңел генә нәмләр һалып алып ҡайтҡан был.

– Бына, – тине ул миңә яҡынлап, – һин нимә тиһәң, шулай була. Алма, тиһәң – алмайым, ал, тип әйтерһең моғайын, тик һинең менән кәңәшләшмәй нисек баҙнат итәйем? Бергә эшләгән ҡатындың ире Төркиәгә барған, шунан алып ҡайтҡан. Размеры как раз минеке. Бер меңен апрель баштарына саҡлы көтөп торам, ти.

Бисә пакетын асып, әйберен өҫтәлгә ҡуйҙы: тун тиһәң, бигерәк ҡыҫҡа, үҙе тыштан ялтырап тора.

– Бына, – тип дауам итте ҡатын, шатлығынан ҡалтыранған тауыш менән, – ни бары дүрт мең ярым тора. Ауырлығы тиһеңме? Бер кило ла булмаҫ... Йә, нимә эшләйбеҙ? Минең дә һинең менән егерме йыл тороп, бер ҡыҫҡа тун кейергә, моғайын, хаҡым барҙыр. Етмәһә, хәҙер ҡыҫҡа тун модала.

Мин өндәшмәйем: модаһы модалыр ҙа, әммә Төркиәнән ҡайтҡан теге ахмаҡ өсөн ниңә мин яуап бирергә тейеш әле? Уның бисәһенә ярамағанды, минеке кейергә тейешме? Ҡатынының размерын белмәй, имеш...

Ҡатын, минең уйҙарҙы белгән һымаҡ, үҙ һүҙен һаман тыҡылдай:

– Һин нимә әйтһәң, шулай булыр, йәнем. Алайыҡ, тиһәң – уйлашырбыҙ, ҡаршы икәнһең, илтәм дә бирәм кире үҙенә! Әлегә миңә үҙ хаҡына бирә, иртәгә ете йөҙгә лә мендереүе бар! Һин нимә тиһәң, шулай була...

Оҙаҡламай кәңәшләшеү тамамланды. Хәйер, ярты сәғәткә һуҙылған был кәңәшмәлә мин ни бары:

– Алып булмаҫ, бик ҡыйбат икән, – тип кенә әйтә алдым.

Ҡатыным, пакетҡа ҡыҫҡа тунды бөкләп һалды ла, уттар сәсә-сәсә, тау-таш аҡтарған тауыштар сығарып, өйөрмә уйната башланы:

– Кешеләрҙең ире – ир төҫлө! Кәңәшләшәләр ҙә, уртаҡ фекер табалар! Кеше һымаҡ бер ҡыҫҡа тун кеймәксе инем! Бәхетең булмағас, ғүмереңдә бер тапҡыр тун кейеп тә ҡалып булмай икән шул! Һин берҙән-бер яҡын кешеңә – ҡатыныңа, ҡаршы килмәҫһең, тип уйлағайным! Тот ҡапсығыңды!.. Йәнәһе мин, иҫәр, аҡыллы ир менән кәңәшләшәм... Тьфү әҙәм аҡтығы!..

Быны "кәңәшләшеү"гә түҙә алмайынса, кейенә һалып, урамға сығып киткәнемде һиҙмәй ҙә ҡалдым. Бер аҙҙан иҫкә килдем: хәҙер бит өйҙә миңә көн булмаясаҡ! "Йә – тун, йә – мин!" тигән ультиматум ҡуясаҡ. Киренән инеп, ул күрмәгәндә пальто кеҫәһенә йәшергән үҙемдең биш меңде ҡатынға һуҙғанымды һиҙмәй ҙә ҡалдым...

Йән тыныслығы тундан ҡәҙерлерәк шул. Әнә шулай йәнде тунап, тун ала инде улар – беҙҙең ҡәҙерле бисәләр.

**Дим ҒИЗЗӘТУЛЛИН.**

# ҠАР ҠЫҘЫҠАЙ

Әҙәм ышанмаҫлыҡ әкиәттәр, кеше күҙе күрмәҫ кәмиттәр көн һайын тыуып ҡына тора. Әйтәйек, әлеге лә баяғы әбей менән бабай йәшәгән. Уларҙың балалары булмаған. Бабай, аптырашынан, ҡарҙан ҡыҙ һыны эшләгән... Ышанырлыҡмы? Һеҙгә нисектер, әммә ләкин бының булыуы мөмкин түгел. Хәҙер ана, күпме теләйһең, шул тиклем бала табып була. Тапмаған хәлдә лә, балалар йортонан тәрбиәгә алаһың, йәки бөтәнсә юлын уйлайһың... Бына ошо урында заманса әкиәт башлана ла инде. Үҙем шаһит булғанын ғына бәйән итәм...

Ғәҙәттә, бәлиғ булмаған балаларҙы дауаханаға йә әсәһе, йә атаһы, йә берәй яҡын туғаны менән һалалар. Республика балалар клиник дауаханаһының бер бүлегендә йәш тә ике айлыҡ Гөлназ исемле ҡыҙыҡай яңғыҙы ғына ята ине. Тәү ҡарашҡа, яңы тыуған сабыйҙы хәтерләтә, тән ауырлығы бары дүрт килограмм тарта... Дауаханала балалар күп булғас, көндөң-көн буйына уның янында өйөрөлөүселәр кәмемәй. Үҙҙәренең уйынсыҡтарын бирәләр, ҡулын, аяғын, битен, башын һыйпап ҡарайҙар. Бер өлкәнерәк йәштәге апай хатта дауаланыусыларҙан аҡса йыйып, бала өсөн бутҡа, кейем-һалым да алып маташты. Ләкин, иң ғәжәпләндергәне шул ине: янына кем генә килһә лә, Гөлназ ул кешенең күҙҙәренә шул тиклем тултырып ҡарай, тик бер ваҡытта ла йылмаймай. Уның ҡараштары ысынында ла ҡар кешеһенекеләй һалҡын, йәнде туңдырырлыҡ... Етмәһә, бер ни өндәшмәй. Әгәр теле асылған булһа, биллаһи, ниҙәр кисергәнен һөйләр ине, зарланып, бәлки күңелен дә бушата алыр ине...

Баланың ҡайһы райондан, ауылдан икәнлеге бер кемгә лә мөһим түгел. Белгән хәлдә лә, ни ҡылаһың – бала ташланған. Уның тере булыуы – бер мөғжизә генә. Әсәһенә егерме биш йәш, атаһына илле самаһы. Бергә йәшәмәйҙәр, әсә кеше эскелек ярата, тиҙәр. Балаһы тыуғас, ҡысҡырып иламаһын тип, ашарға-эсергә гелән араҡы биргән, тип һөйләнеләр... Бала шуға ла үҫмәгәндер, ә йөҙөнә эскелек сатҡыһы сығып өлгөргән. Ысынлап та, йәшел ағыуға иҫереп, тауышын сығармағандыр, бисараҡайың. Дауаханаға килтергән аҙнала, туйынып алғанса ла тауышын сығармаған ул. Тамағы аш тәмен татып, үҙенә иғтибар һиҙгәс кенә, сабыйҙарға хас иркәләнеү менән илай, ҡулға ынтыла башлаған. Ынтылыу менәнме ни, бүтән әсәләр бит дауаханаға Гөлназды тәрбиәләр өсөн килмәгән, һәр кемдең үҙ балаһы, үҙ хәстәре, тигәндәй...

Исеме бигерәк матур үҙенең – Гөлназ. Ғәҙәттә был исемде гөлгә тиң сибәрҙәренә, наҙға төрөнөп йәшәһен, тип, ҡушалар. Ошо урында ирекһеҙҙән баяғы әкиәткә әйләнеп ҡайтҡы килә. Әйҙә, балалары булмаған ҡарт менән ҡарсыҡ Ҡарһылыуҙы әүәләмәһен, ә ошо Гөлназды дауахананан килеп алһын. Уны яҙ етеүгә ереп ҡуймаһын тип ҡурҡырға түгел, киреһенсә, туң ҡарашлы булмаһын тип йылылыҡ, иғтибар һәм кешесә тәрбиәләү генә етә. Шул сағында һәр әкиәттең аҙағындағыса һәр кем бәхетле булып, оҙон-оҙаҡ бергә йәшәр ине...

**Рәзилә ЫРЫҪҠУЖИНА.**

**А. АНДРЕЕВ**



**– Ҡара әле, Емеля крутой тачка алып ебәргән...**
– Глянь-ка, Емеля крутую тачку купил...

## Әйттем иһә кайттым...

● Урынһыҙ әйтелһә, аҡыллы һүҙҙең дә эште боҙоуы мөмкин.

● Аҡыллы булып күренеү ҡыйын түгел, быға башҡаларҙың иғтибарын йәлеп итеү ҡыйын.

● Күл күләүектән көнләшмәҫ.

● Ярҙан этеп тә ярҙам итеп була – кәмәһе ҡомға терәлгәндәргә.

● Күңеле тар, етмәһә, ҡаплаған ҡар.

● Карьера баҫҡысына менгәндә туҡтап алырға ла була, төшкәндә туҡтап булмай.

Р. МӘЙМҮНОВ.

М. ЛАРИЧЕВ




## Хужа үҙебеҙҙеке!

### Өйрәк һурпаһы

Хужа Насретдин өйрәктәр йөҙөп йөрөгән күл буйында ултыра икән. Ул ҡулындағы икмәк киҫәген һыуға манып ала ла ашай, манып ала ла ашай. Быны күреп торған берәү:

– Ниңә улай итәһең ул? – тип һорай.

Хужа:

– Мин өйрәк һурпаһын ашап ултырам, – тип яуаплай.

### Бейек һыйырҙар

Хужа Насретдин баҙарҙа һатыу итеп, бер аҙ аҡса эшләп ҡайта. Аҡсаһын нисек тә юғарыраҡ урынға йәшереү ниәтенән ишек алдында үҫкән ағасты бөгә лә янсығын уның осона бәйләп ҡуя. Был хәлде күҙәтеп торған күршеһе, хужа өйгә инеп китеү менән, янсыҡтағы аҡсаны ала ла урынына һыйыр тиҙәге һала.

Бер нисә көндән Хужа аҡсаһын алмаҡсы була. Янсыҡта һыйыр тиҙәген күргәс, ғәжәпләнеүенең сиге булмай.

– Шулай ҙа бейек һыйырҙар булыр икән? – тип аптырай.

### Сапанымды һыйлайһығыҙ бит

Хужа Насретдинды бик дәрәжәле кеше ашҡа саҡыра. Күптән түгел генә ул яңы сапан һатып алған була. Әлбиттә, мәжлескә ошо сапанды кейеп бара.

Табында Насретдин иң тәүҙә сапанының еңен ашҡа тыға. Быны күргән йорт хужаһы ғәжәпкә ҡала.

– Ниңә ашҡа сапаныңдың еңен тығып ашайһың ул? – тип һорай тегенән.

– Сапанымды һыйлайым әле, һеҙ бит мине ашҡа затлы сапан кейгән өсөн генә саҡырҙығыҙ, – тип яуап бирә Хужа.

**Мәсғүт ҒИЛМЕТДИНОВ.**
Шаран районы.

## Беҙҙең ауыл мәҙәктәре

### Быйма атҡан Рәхимбай

*Һуғыштан һуңғы йылдарҙа кейәм тиһәң – кейеме, ашайым тиһәң ризыҡтың да юк саҡтары ине. Минең атайым алтын ҡуллы кеше булды: бура бурарға, итек тегергә, быйма төпләргә – барлыҡ ауылдаштар беҙгә килә торғайны.*

*1954 йыл булғандыр, ҡышҡы бер көндә ауыл Советы рәйесе Авзал ағай атайыма быймаһын яматырға килтерҙе. Дөрөҫөн әйткәндә, ул ошо быймаларын өс йыл рәттән алып килә. Быйма тимәһәң, хәтере ҡалыр, исеме генә бар – бөтә ере тишелеп бөткән. Атайым ҡыҙыҡ өсөн тишектәрҙе һанап та ҡуйҙы – улар ундан артыҡ ине. Шунан хужаһы ҡайтып китмәҫ элек, атайым баяғы быймаларҙы рәшәткәләр башына кейҙереп, өйҙән һунарсы мылтығы сығарҙы ла:*

*– Авзал туған, быймаларыңдың ямар ере ҡалмаған, ғүмере бөткән. Әйҙә, һине өмөтләндереп йөрөмәһендәр, уларҙы атып үлтерәйек тә ҡуяйыҡ, – тип тегеләргә атып, тағы ла икешәр тишек яһаны.*

*– Эй-й, ағай, әрәм генә иттең бит, – тип ауыр көрһөнөп, ҡайтып китте рәйес ағай.*

*Беҙҙең Һарай ауылында Рәхимбай исемле өс кеше бар ине. Баяғы хәлдән һуң, улар хаҡында һүҙ барғанда ауыл халҡы:*

*– Ә-ә, теге быйма атҡан Рәхимбаймы? – тип һорар булған.*

*Әле һаман ҡунаҡҡа ҡайтһам, мине танымаған ауылдаштарыма: «Быйма атҡан Рәхимбай ҡыҙымын», – тиһәм, бик тиҙ танырҙар.*

**Әлфиә ХӘМЗИНА.**
Әлшәй районы.

# Таралыр журналыбыҙ, булғанда дуҫтарыбыҙ

Ҡатын-ҡыҙҙың йәшен һорамайҙар, тиһәләр ҙә, беҙҙең журналды уҡыусылар, ниңәләр, иң тәүҙә нисә йәштә булыуҙарын әйтә. Был, моғайын, «Һәнәк»кә мәртәбә өҫтәү йөһәтенәндер. Ә Бәләбәй ҡалаһынан **Нәғимә Манзулина:** «Һикһәнде тултырһам да, һеҙҙең менән һаман дуҫ булғас, ҡартлыҡҡа борсолмайым. Көнөнә берәр мәҙәк-ҡыҙыҡ уҡып алһам, донъялар яҡтырып китә», – ти.

«Йәшләй генә мәктәптә вожатый булып эшләгәндә, балаларҙы ҡыҙыҡһындырайым тип «Һәнәк» биттәрендәге тертмә һүҙҙәрҙе, һүрәттәрҙе ҡулланып, стена гәзиттәре сығара инем», – тип хәтерләй Нәғимә Әғзәм ҡыҙы.

Ул бөгөн дә көләкәс журналдың һәр һанын түҙемһеҙлек менән көтөп ала икән. Әлбиттә, ошондай мөкиббән киткән дуҫтарыбыҙ барҙа, журналыбыҙ быуындан-быуынға таралыр!

«Бала сағымдан яратып уҡыған журналымдың һәр һанын яҡын туғанымдай көтөп алам. Яңғыҙым йәшәһәм дә, яңғыҙлыҡҡа һис зарланмайым, сөнки минең мәңгелек юлдашым – «Һәнәг»ем бар. Ҡайҙа йөрөһәм дә уны – иң ҙур байлығымды – үҙем менән алам. Туғандарыма, таныштарыма күрһәтәм, уҡытам», – ти Әбйәлил районының Гусев ауылынан **Рәсимә Яхина**. Ул беҙҙең журналды уҡыусы ғына түгел, даими авторыбыҙ ҙа. Бәйгеләрҙә әүҙемлеген күрһәтә, һәр һан сыҡҡас, үҙенең тәьҫораттары менән уртаҡлашырға ла өлгөрә. Афарин!

**Әйткәндәй, әгәр һеҙ ҙә ғүмерегеҙҙе «Һәнәк»һеҙ күҙ алдына килтермәйһегеҙ икән, бөгөндән үк икенсе ярты йыл өсөн журналға яҙылып ҡуя алаһығыҙ. Почта бүлексәләренә ашығығыҙ, дуҫтар! Бергәләп көләп, ғүмерҙәрҙе тағы оҙайтыу мөмкинселеген үҙ ҡулдарыбыҙға алайыҡ!**



## Һунарсылар

**Ике һунарсы һөйләшеп ултыра:**

**– Ҡапыл айыу килеп сыҡһа, нимә эшләр инең?**

**– Әлбиттә, атасаҡмын!**

**– Әгәр мылтығың өйҙә тороп ҡалған булһа?**

**– Юҡты һөйләмә лә. Мин уны бер ҡасан да онотоп ҡалдырғаным юҡ.**

**– Тормошта ниндәй генә хәлдәр булмай. Бәлки, ысынлап та?**

**– Һи, аптырап торған, ти дәдәң. Ул саҡтамы, выжт ағас башына менәм дә китәм!**

**– Әгәр ағас та булмаһа?**

**– Нисек инде урманда ағас юҡ?**

**– Юҡ тигәс, юҡ инде. Мәҫәлән, ҡола ялан, ти?**

**– Ул сағында йүгерәсәкмен. Был аяҡтар ни өсөн тиһең?**

**– Әгәр аяғың һынған булһа?**

**– Тотаһың да ҡыҙыҡ ҡына хәбәр һалаһың. Аяҡтарым шап-шактай минең. Бына, ҡара!**

**– Шулай ҙа һынған, ти.**

**– Ҡайһылай аптыратаһың ул, һин минең дуҫмы, әллә айыуҙыҡымы?**

**В. ГАФУРОВ.**







**– Әһ-һә, беҙҙән ҡасып ҡотолмаҡ булғайнығыҙмы?**
– Во-от, оказывается где вы хотели от нас упрятаться...

# Көлгәнгә – көлкө

☺☹☺

Бәләкәй малай альбом алған да шуны аҡтарып ултыра. Быны күргән әсәһе:

– Улым, нимә эшләйһең? – тип һораған.

– Йәш сағымды иҫкә төшөрөп ултырам әле, – ти икән малай.

☺☹☺

– Мин улымды берәй тынлы оркестрға бирергә теләйем.

– Булдырыр, тип уйлайһыңмы?

– Әлбиттә. Уның өс метрҙан шәмдә өрөп һүндергәне бар!

☺☹☺

– Мин бер ҡасан да ахмаҡтар менән бәхәсләшмәйем.

– Тимәк, һәр ваҡыт улар менән бер фекерҙәһең!

☺☹☺

– “Йыр дәресендә йоҡлап ултырҙы”,– тине уҡытыусың, был дөрөҫмө?

– Бөтә класс бишек йыры йырлағанда нисек йоҡламай түҙәһең!

☺☹☺

– Дәрестәреңде әҙерләшергә атайың булыштымы әллә?

– Әлбиттә! Мин яҙҙым, ә ул эргәмдә ҡайыш тотоп торҙо.

☺☹☺

Күптән түгел генә өйләнгән йәш ир эштән ҡайтыуға ҡатынын шелтәләй:

– Һин кухняла тағы нимәләр яндырғанһыңмы, көйҙөргәнһеңме?

– Эйе шул, – тип туп-тура




әйтә ҡатыны. – Быныһы бигерәк тә ҡыҙғаныс булды: “Тәмле һәм файҙалы аштар” тигән китабыбыҙ янды...

☺☹☺

Бер әбей кибеттә ун кило он үлсәүҙе үтенә һәм шунда уҡ үҙенең шиген белдереп:

– Белмәйем, күтәреп ҡайта алырмынмы икән? – ти.

Һатыусы:

– Ҡурҡма, әбекәй, мин уны бик еңел күтәреп ҡайтырлыҡ итеп үлсәрмен, – тип тынысландыра.

Л. РАЯНОВА йыйҙы.

☺☹☺

Әсәһе:

– Аша, улым!

Улы:

– Ашамайым, әтеү эсем һиненеке һымаҡ була.

☺☹☺

– Минең атайым урыҫ, әсәйем башҡорт. Мин кем булам инде?

– Наполовину урыҫ, наполовину башҡорт.

– Вот так или вот так? – тип биленән дә, башынан да аяғына тиклем кәүҙәһен икегә бүлеп күрһәтә малай, аптырап.

☺☹☺

Ҡыҙы әсәһенә:

– Мине әрләмәгеҙ, әтеү президентҡа хат яҙам! – тип ҡурҡыта.

– Бөтөнләй шашҡан икән был! – ти әсәһе, әммә әрләүен туҡтата.

☺☹☺

Олатаһы ейәненә:

– Улым, һин, ҙурайғас, беҙҙе ҡарарһың инде, – тигәнгә, ейәне:

– Мин ҙурайғансы, һеҙ үлеп бөтәрһегеҙ ул, – тип яуаплай.

☺☹☺

– Ни эшләп мәктәпкә бармай өйҙә ултыраһығыҙ?

– Мөғәллим ағай кисә ҡунаҡта булды, бөгөн мәктәпкә килмәй ул.

Сәбилә СӨЛӘЙМӘНОВА.
Өфө ҡалаһы.




**ҺӘНӘК**
**№ 4 (1199)**

ISSN 0208–094X

**“ХЭНЭК” (“ВИЛЫ”)**
Ежемесячный журнал сатиры и юмора на башкирском языке.
**Издается с сентября 1925 г.**

Журналды ойоштороусылар:
**Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай, Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте.**

**Адрес редакции:** 450079, г. Уфа, ул 50-летия Октября, 13, “Хэнэк” (“Вилы”).

**Телефондар:**
Баш мөхәррир 272-91-02
Баш мөхәррир урынбаҫары 272-52-82
Бүлектәр 272-87-43, 272-52-82

**Подписка на журнал принимается без ограничений на всей территории страны.**

Беҙҙең сайт: henek.pressarb.ru **Индекс 73456**

**Мәҡәләләрҙә килтерелгән факттарҙың дөрөҫлөгө өсөн уларҙың авторҙары яуаплы.**

**Баш мөхәррир Марсель СӘЛИМОВ**

Мөхәрририәт һәм редакция советы:
**Александр АНДРЕЕВ (биҙәлеш бүлеге мөхәррире), Венер ИСХАҠОВ (фельетондар бүлеге мөхәррире), Риф МИФТАХОВ (әҙәбиәт бүлеге мөхәррире), Марат ӘМИНЕВ (яуаплы сәркәтип), Рәзилә ЫРЫҪҠУЖИНА (хаттар бүлеге мөхәррире), Хәлил ӘХТӘМОВ (баш мөхәррир урынбаҫары), Артур ВАСИЛОВ, Мансаф ҒИЛӘЖЕВ, Марат КӘРИМОВ, Рәсих ХАННАНОВ, Венера ХӘКИМОВА, Марат ӘБДҮШЕВ.**

Сдано в набор 11.03.09. Подписано к печати 12.04.09. Офсетная печать. Усл.-печ.л. 2.Уч.-изд. л. 3,56. Формат 70x100 1/16. Зак. №27. Тираж 3794.

Корректор З. МАЗҺАРОВА

**Журнал зарегистрирован в Министерстве печати и массовой информации РБ. Свидетельство о регистрации № 687 от 15.12.1995 г.**

Цена в розницу свободная.


© “ҺӘНӘК”, 2009

Отпечатано в типографии ГУП “Издательство “БАШКОРТОСТАН”.

# Көләсворд










**Горизонталь буйынса:** 1. 1-се фото. 7. Зоологияны яҡшы белгән рәссам. 8. Сәскәләр үҫтереү өсөн йылы бина. 9. Үрнәкле һалдаттың һүҙе. 10. Францияла етештерелгән автомобиль. 11. XVIII быуат башындағы сәнғәт йүнәлеше. 15. Ун ике туғандың береһе. 19. Капиталдан килгән даими төшөм. 20. Ишәктең һүҙе. 21. Инглиздың 91,44 сантиметры. 22. Ағас сабата. 24. Ат егелгән трамвай. 25. Әкиәт ижад иткән ике туған. 26. Аркадий Гайдарҙың өмөтөн аҡламаған ейәне. 27. Электр ҡаршылығы бирәмеге. 32. Ярым ҡиммәтле таш. 33. Эстониялағы университет ҡалаһы. 34. В. Этуштың көлкөлө персонажы. 36. Юл өҙөлгән урын. 37. Бер үркәсле дөйә. 38. 100 кв. метр. 39. Ҙур тулҡын, йәки әйләнгес механизм. 40. Балданың хужаһы. 42. Совет сатиригы. 43. Рәсәй космонавтикаһының атаһы.

**Вертикаль буйынса:** 1. Билдәле автоуҙышыусы. 2. Коньяк төрө, йәки император. 3. Көнсығыш Рим империяһы. 4. Йөк карабы. 5. Фантомастың машинаһы. 6. "Городок" телетапшырыуының алып барыусыһы. 12. Урыҫ теленең танылған белгесе. 13. Күҙлек кибете. 14. Тутыйғош тоҡомо. 16. Примат. 17. Биография төҙөүсе. 18. Аяҡлы көҙгө. 23. Ауып барған башняһы менән дан алған ҡала. 28. 2-се фото. 29. Фотоаппарат өсөн өс таған. 30. Ливияның баш ҡалаһы. 31. Борон заман артиллерисы. 35. Тимер шиналы трактор. 41. Эдгар ...

**Хәлил ӘХТӘМОВ төҙөнө.**

## 3-сө һанда баҫылған көләсворд яуаптары

**Горизонталь буйынса:** 1. Пари. 3. Барбарис. 7. Динозавр. 8. Штандарт. 9. Хо. 12. Ҡудашева. 15. Пеле. 16. Па. 18. Тибет. 19. Олигархия. 22. Киви. 23. Краб. 25. КА. 26. Цицерон. 28. Иа. 31. Пугачёва. 32. Ямайка. 33. Геодезия. 34. Орбита.

**Вертикаль буйынса:** 1. Падишаһ. 2. Ренуар. 4. Аквариум. 5. Скипидар. 6. Дзюдо. 10. Опал. 11. Шлаг. 13. Анис. 14. Есенин. 16. Полигамия. 17. Трико. 20. Диван. 21. Вашингтон. 24. Хетчбек. 25. Конвоир. 27. Шпага. 29. Амур. 30. Айни.